✓ ***Әгәр ҙә серек алманы матур алмалар һалынған кәрзингә урынлаштырһаң, ул башҡалар ыңғайына матурға әйләнмәҫ, киреһенсә, башҡа алмаларҙы ла серетер. Шуға ла һәр ваҡыт иманлы кешеләр араһында бул. Әйләнә-тирәбеҙ һәм аралашҡан кешеләребеҙ беҙгә бик ныҡ йоғонто яһай икәнен онотма.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 - 16 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№19 (593)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Бөгөн күрһә икән Пушкин...**



3 телмәр тота белмәгән беҙҙе

**Ватансылыҡ ниҙән башлана?**



5-6

**Ветерандар хәҡикәте...**





8-9 йәш быуынға ла һабаҡ бирһен

**Бер төбәктән - ике герой**





12-13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең ғаиләлә Бөйөк Ватан һуғышы тураһында ниндәй хәтирә һаҡлана?

***Таңсулпан ҒАРИПОВА, яҙыусы:*** Атайым - Мөхәмәтколов Хизбулла Ғибәҙулла улы - һуғыш башланғанға тиклем армия сафында Төркөстан фронтына эләгә һәм унда кавалерия буйынса ҙур тәжрибә туплай. Унан ҡайтҡас, ауыл малайҙарын да ат менән эш итергә өйрәтә, уларға "джигитовка", йәғни ат өҫтөндә оҫта йөрөү, ат өҫтөндә һуғышыу дәрестәре үткәрә. Шуға күрә һуғыштың икенсе көнөндә үк ғариза яҙып, үҙе теләп фронтка киткән атайымдың Башҡорт кавалерия дивизияһы сафтарында һуғышыуы бәхәсһеҙ була. Ошо дивизия составында Берлинғаса яу юлы үтә ул. Дәһшәтле ҡан ҡойоштарҙың уртаһында булырға тура килә уға. Днепрҙы кискән саҡта ҡаты яраланған атайым, ауылына ҡайтып, бер аҙ хәл йыйыу өсөн ял бирәләр. Сталинград өсөн барған ҡаты һуғыштар ваҡытында атайым "Хоҙайым, ошо мәхшәрҙән иҫән-һау ҡотолоп, тағы ла 9 ғына йыл йәшәһәм, һис үкенмәҫ инем" тип, үҙенә ғүмер һорай. Хоҙай ишеткәндер, атайым 1945 йылдың 29 августында имен-аман тыуған ауылына, ғаиләһе янына әйләнеп ҡайта. Ҡайтҡас та ауылды тергеҙеүгә, колхозды күтәреүгә бар көсөн һала. Әсәйем менән бергә ҡарауһыҙ, етем ҡалған әбейҙәрҙе өйөбөҙгә алып ҡайтып көтәләр. Хоҙай уға, үҙе һорағанса, теүәл 9 йыл ғүмер бирә. Колхоздың бүрәнәнән эшләнгән беренсе һыйыр аҙбарын төҙөү өсөн агас әҙерләргә барғанда ике иптәшен ҡотҡарам тип, иптәштәренең өҫтөнә төшөп барған бүрәнәне алып ташлағанда имгәнеп, 45 йәшендә һәләк була. Атайым үлгәндә минә 6 йәш кенә булып ҡала. Мине гел генә - баҫыуға сыҡһа ла, урманға барһа ла, эшенә йөрөгәндә лә - арбаһына ултыртып, үҙе менән алып йөрөнө ул. Ул үлгәс, ауылдаштарым мине "Хизбулланың ҡыҙыл башлы ҡомартҡыһы", тип йөрөттө. Атайым моңло итеп йырлай торғайны. Уның башҡарыуындағы башҡорт халыҡ йырҙарын барыһы ла яратып тыңлар ине. Кәрим Дияров, Ғата Сөләймәнов кеүек ҡурайсылар күп йырҙарҙың һүҙҙәрен, тарихын атайымдан яҙып алды. Беҙҙең ғаилә өсөн иң ҙур байрам - 9 май байрамы, Еңеү көнө. Уны һәр ваҡыт көтөп алабыҙ, билдәләйбеҙ, атайымды, уның һуғыштан ҡайтмаған ҡустыларын иҫләйбеҙ.

***Зөлфиә МАНАПОВА, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылы, уҡытыусы:*** Бөйөк Ватан һуғышы башланғанда атайыма 18 йәш була. Ул Башҡорт кавалерия дивизияһы ойошторолғас та уның сафына саҡырыла һәм башҡа ҡыйыу йөрәкле, ҡурҡыу белмәҫ башҡорт егеттәре менән бергә һуғыштың иң ҡаты бәрелештәрендә ҡатнаша. Уларға һәр ваҡыт фронттың иң алғы һыҙығында булырға тура килә, ләкин дошман уты уларҙың еңеүгә булған рухын һындыра алмай. Сталинград өсөн барған ауыр алыштар ваҡытында ла башҡорт атлылары һынатмай һәм күптәре шунда башын һала. Атайым - Манапов Әхмәт Атаулла улы ошондай алыштарҙың береһендә ҡаты яралана. Снаряд ярсығы уның тубыҡтан аҫҡы яғына эләгә, һәм ул иҫен юғалта. Шәфҡәт туташтары һушһыҙ ятҡан һалдатты, үлгәнгә һанап, медсанчастҡа алып бармай, һуғыш яланында ҡалдыра. Яралы көйө ямғыр һыуы тулған соҡорҙа таңға тиклем ятҡан атайымдың аяғы серей башлай. Госпиталдә тәүҙә аяғының тубыҡтан аҫҡы өлөшөн киҫәләр, ләкин гангрена туҡтамай. Һуңынан аяғын тағы ике тапҡыр ҡырҡалар. 6 ай госпиталдә ятҡандан һуң, һул аяғын бөтөнләй ҡалдырып, ҡултыҡ таяғына таянып, 1944 йылда өйөнә әйләнеп ҡайта атайым. Сталинград өсөн алышта күрһәткән батырлығы өсөн ул 2-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнә. Ләкин орденын түшенә тағырға насип булманы уға, сөнки ул 2000 йылда вафат булды, ә оло награда тик 2003 йылда ғына балаларына тапшырылды.

Ҡәһәрле һуғыш атайымдың аяғын алып ҡалһа ла, тормошҡа булған һөйөүен һүндерә алманы. Һәр эште оло дәрт менән башҡарған, бер ҡасан да төшөнкөлөккә бирелмәгән кеше булды ул. Һуғыштан һуң әсәйебеҙ, Надршина Латифа Аҡъегет ҡыҙы менән тормош ҡороп, матур ғүмер юлы үттеләр, 5 бала тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Еңеү көнө - илебеҙҙә билдәләнгән иң оло байрам һәм һәр ваҡыт шулай булырға тейеш. Беҙҙең тыныс тормош өсөн ғүмерҙәрен биргән, ҡаты яраланып ҡайтып, һыҙланыу-ауыртыуҙар менән йәшәгән һалдаттарҙың ҡаһарманлығын онотоу ғәфү итмәҫлек хата буласаҡ.

***Рәйлә ФӘСХЕТДИНОВА, "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиеһы генераль директоры:*** Атайымды 1941 йылда 25 йәшендә һуғышҡа алып китәләр, һәм ул һуғыш бөткәнсе, илбаҫарҙарға ҡаршы көрәшә. Еңеүҙе яу яланында ҡаршылаған атайыма, башҡа совет һалдаттары кеүек үк, тиҙ генә тыныс тормошҡа аяҡ баҫырға насип булмай. Һуғыш тамамланғас та, оккупанттарҙың ҡалдыҡ ғәскәрҙәрен илдән ҡыуып сығарыу өсөн улар һаман сафта ҡала. Шулай ҙа 1945 йылдың авгусында атайыма - Фәйзуллин Ғариф Шаңғәрәй улына - бер айға ғына булһа ла Башҡортостанға, тыуған йортона ҡайтып килеү мөмкинлеге тейә. Ошо ҡайтыуында ул минә ғүмер бүләк итеп китә. Калинин өлкәһендә хеҙмәтен дауам иткән атайым донъяға тағы бер балаһы тыуасағын белеп, ныҡ шатлана. Малай булһа - Рәил, ҡыҙ булһа - Рәйлә исемен бирербеҙ, тип яҙған хаттары ғаиләбеҙҙә изге ҡомартҡы булып һаҡлана. Ләкин уға ҡыҙын, йәғни мине, ҡулдарына алып һөйөү бәхете теймәй, иртәгә ҡайтырға юлға сығам тиеп йөрөгәндә уны урманда ҡасып йөрөгән дошман ҡалдыҡтары үлтереп китә. Был 1946 йылдың 18 майы була. Ә биш көндән һуң мин донъяға килгәнмен. Шулай итеп, атайым - мине, мин - атайымды күрмәнем. Атайым, улым тыуыр, тип ышанғандыр инде, малайҙар күлдәге тектереп, йүргәктәр һалып, посылка ебәргән булған...

Атайымдың үлеме тураһындағы хәбәр оҙаҡлаған. Ана ҡайта, бына ҡайта тип көтөп йөрөгән әсәйем Ғарифының вафат булыуын һуңлап ҡына белгән. Үле хәбәре килгәс тә, бер-нисә йыл "ҡайтыр", тип өмөтләнеп көткән. Балаларын бергә тәрбиәләй алмауҙарын, Ғарифының яңы тыуған Рәйләнең күрмәй, һуғыш бөткәс һәләк булып ҡалыуын уйлап, сеңләп илауы әле булһа ҡолағымда сыңлап торған кеүек. "Бигерәк һәйбәт кеше ине атайығыҙ. Минә алтынға урап, көмөшкә көпләп ҡуйҙы бит ул", тип ҡабатлар булды. Атайымдың иркәләүен тоймай үҫеүем ғүмерлек үкенесем булып йәшәй күңелдә. Һуғыш миллионлаған баланы атайһыҙ ҡалдырҙы, уларҙың көслө ҡулдарына таянып үҫеү мөмкинлегенән мәхрүм итте. Башҡа бындай ҡазалар булмаһын, донъялар имен генә торһон, тип көн дә теләктәр теләйем.

**Гөлназ МАНАПОВА** әҙерләне.



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ИЛҺӨЙӘРЛЕК...
## ябай ғынанан башлана

**Тимерғәле КИЛМӨХӘМӘТОВ, БДУ-ның Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты профессоры, яҙыусы:** Бөгөн беҙ бик көсөргәнешле заманда йәшәйбеҙ. Ауылда балалар һаны етмәүҙән мәктәптәр ябыла, хужалыҡтар көрсөк кисерә. Етәкселәр, алдынғы ҡарашлы кешеләр менән һөйләшкәндә һүҙ ошо темаға ҡағыла башлаһа, бер-ике йылдан балалар һаны артасаҡ, ябылған мәктәптәр яңынан асыласаҡ, ә ауыл кешеһенә шәхси эшҡыуарлыҡ, фермерлыҡ менән шөғөлләнеү өсөн бөтөн шарттар бар, тигәнерәк фекерҙәр ишетәм. Ауылда йәшәп ҡарамаған таныштарымдың, унда тормош көтөргә мөмкин, тик тырышлыҡ ҡына кәрәк, тиеүҙәре менән ризалаша алмайым. Ауыл кешеһе шәхси эшҡыуар ҙа, фермер ҙа булып ҡараманы түгел, ҡараны. Әммә ауыл хужалығы етештергән продукцияның сығымдарҙы ҡапламауы, техника һәм яғыулыҡтың ҡиммәт булыуы уларҙы фермер булыу идеяһынан төңөлдөрҙө. Совет замандында төҙөлгән күпме колхоздарҙы тарҡатып, фермаларҙы емереп, техникаһын таратып бөттөләр. Хәҙер ауыл хужалығын тергеҙеү өсөн шул байлыҡ бик тә кәрәк, әммә емеректәрҙән башҡа бер нәмә ҡалмаған. Ябылған ауыл мәктәптәре биналарын да ике йыл дауамында икенсе маҡсатта файҙаланып, тупланғанды сарыф итеп, әрәм-шәрәм итеп бөтмәҫтәр, тип һүҙ биреп булмай...

Ауылда ла, ҡала ерендә лә тиҙ арала хәл итеүҙе талап иткән кисектергеһеҙ мәсьәләләр күп, әммә иң мөһиме - йәш быуынға, балаларыбыҙға туған телебеҙгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Республиканың иҡтисады аҡһаған саҡта ла, ауыл хужалығы көрсөк кисергән осраҡта ла был беҙҙең төп бурысыбыҙ булып ҡала. Шуға күрә, бөгөн зыялы кешеләребеҙҙең төп маҡсаты - үҙ ғаиләһе өлгөһөндә балаһында туған телгә, милләтенә ҡарата ихтирам, ғорурлыҡ хисе тәрбиәләү. Әммә йыш ҡына бының киреһе күҙәтелә: күп кенә замандаштарым үҙ ғаиләһендә башҡорт телендә һөйләшмәй, башҡортса гәзит-журналдарға яҙылмай. Бәғзе берәүҙәрҙең берәй гәзиттә үҙе тураһында йә үҙе яҙған мәҡәлә баҫылһа, редакциялар буйлап гәзиттең шул һанын эҙләп, һоранып йөрөүенә шаһит булғаным бар. Башҡортостанда йәшәп, үҙең башҡорт була тороп, нисек инде ғаиләңә туған телдә сыҡҡан журналдар, китаптар алдырып уҡымаҫҡа мөмкин? Башҡортлоҡ, илһөйәрлек ана шулай бик үк мөһим булып күренмәгән нәмәнән, бәләкәйҙән башлана бит.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ҺОРАУ АЛЫУ, ТЕНТЕҮ...
## башҡа "ҡул ҡайырыу"ҙар

**Күптән түгел үҙәк гәзиттәрҙә БДИ тапшырыу пункттарында тыйыу сараларын тағы ла ҡәтғиләштереү тураһында уҡып, хайран ҡылдым: сәстәр үрә торорлоҡ! Бына ул тыйыуҙарҙан ҡайһы бер өҙөктәр: "Мәғлүмәт хәүефһеҙлеге талаптарына яуап бирмәгән пункттар ҡыҫҡартыласаҡ. Заданиелар һалынған пакеттар төбәктәргә бер тәүлек ҡалғас ҡына килтереләсәк. Пункттар видеокүҙәтеү системалары аҫтына алынасаҡ, металл эҙләүсе приборҙар ҡулланыласаҡ" һ.б.**




Быларҙы уҡығандан һуң күҙ алдына ниндәй күренеш килеп баҫыуын аңлау ауыр түгелдер: күҙгә күренмәгән фронт шарттарында хәүефһеҙлек өсөн үлемесле көрәш башланған. Бөгөн мәктәпте тамамлаусы, әле бер ниндәй ҙә яҙыҡ эш ҡылмаған уҡыусы балаларға ҡаршы ана шундай ҡәтғи "һуғыш" саралары иғлан ителә һәм ул көнләшерлек теүәллек менән тормошҡа ашырыласаҡ. Иртәгә үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫасаҡ балаларға шул тиклем дә ышанмаусылыҡ, уларҙың намыҫына алдан уҡ шикселлек күрһәтеп, уларҙың кешелек бәҫен кәмһетеүсе ошо аҡтыҡкы сараларға барып етеүе менән илдең хәҙер инде нисә йылдар арҡа һөйәгенән яҙып, бер сиктән икенсеһенә һуғылыусы мәғариф системаһы үҙе күптән граждандар ышанысынан һәм ихтирамынан ҡолаҡ ҡағыуын һаман булһа аңлап етмәйҙәрме икән ни юғарыла?

Эйе, һүҙ ҙә юҡ: контроль кәрәк, ләкин ул кеҫәләрҙе тентеү, бала артынан эйәреп бәҙрәфкә тиклем барып етеү кимәленә төшөргә тейеш түгел ине бит шулай ҙа. Балаларҙан күрәләтә ғәйеп эҙләрҙән алда, мәғарифыбыҙҙың нигеҙен серетеүгә алып килгән сәбәптәргә ҡаршы ана шундай уҡ теүәллек менән көрәш алып барырға, совет мәғарифы традицияларын үҫтерергә кәрәк ине. Юғиһә, илебеҙгә күпме "алтын" башлы ғалимдар, инженерҙар, башҡа белгестәр биргән әҙер тәжрибәне Америка һәм көнбайыш системаһының уйланыуға, анализлауға түгел, ә йәнһеҙ тест һорауҙарына ҡоролған яҙма "һорау алыу"ға алмаштырып, балалар башын ҡатыралар. Был турала күп яҙҙыҡ, күп һөйләнек, ләкин йәмәғәтселек тауышын бер кем дә иҫәпкә алып торманы. Имтихан хәҙер балалар өсөн иң ҡурҡыныс стресс сығанағына әүерелде...

Ярай, ә бит әйтергә теләгән фекер икенсе юҫыҡта ине. Әлеге сиктән ашҡан хәүефһеҙлек сараларын ҡаҙна малын үҙләштереүсе ата бурҙар, иҫерек водителдәр, ҡараңғы урамдарҙа һәм подъездарҙа ҡорбанын һағалаусы юлбаҫарҙар, ришүәтселәр, наркотик һатыусыларға ҡаршы ҡулланһалар, енәйәтселек бер аҙға сигенә бирер ине, бәлки, тип әйтмәксе генә инем...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана. Беләбеҙ, Рәсәй почта хеҙмәтенең гәзит-журналдарға яҙылыу хаҡын саманан тыш юғары күтәреп ебәреүе беҙҙе лә, һеҙҙе лә тетрәндерҙе. Ә шулай ҙа гәзитебеҙҙең тоғро дуҫтары, аңлы уҡыусыларыбыҙ был ауырлыҡты ла аңлап ҡабул итер, тип ышанып ҡалабыҙ.**

• Шулай итеп, 2014 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **507 һум 72 тингә**, **50673** индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **537 һум 72 тингә** яҙылырға кәрәк буласаҡ. Ләкин ошо хаҡтың яртыһынан аҙы - **246 һумы** ғына беҙҙең редакция билдәләгән хаҡ булыуын да белеп ҡуйығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ.**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **336 һумға** яҙылырға була.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға **246 һум**.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум**.

• **Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә онлайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә ба-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов эш сәфәре барышында Ҡырмыҫҡалы районында булды, бер нисә ауыл хужалығы предприятиеһының эше менән танышты, сәсеү барышын тикшерҙе. Ляхов ауылында "Артемида" компаниялар төркөмөнөң былтыр ҡыш "500 ферма" программаһы буйынса төҙөлгән малсылыҡ комплексын, сәсеү һәм тупраҡты эшкәртеү өсөн ҡулланылған техникаһын ҡараны. Артабан Президент яңы "Башовощснаб" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте йылытма хужалығының эше менән танышты. Февралдән алып майға тиклем бында 145 тонна күләмендә ҡыяр алғандар.

✓Радио тапшырыу өлкәһендә "Radio Station Awards-2014" Бөтә Рәсәй премияһына тауыш биреү тамамланды. "Волга буйы федераль округының иң яҡшы радиостанцияһы" номинацияһында еңеүсе тип "Юлдаш" радиоһы танылды, уның өсөн радио тыңлаусылар 48526 тауыш биргән. Премияның сайтында хәбәр ителеүенсә, премия тапшырыуға йәмәғәт тауыш биреүҙә бөтә Рәсәйҙән 160 радиостанция дәғүә итте.

✓Был көндәрҙә Ашҡаҙар һәм Стәрле йылғаларында һыу кимәленең артыуы ихтимал. Ҡала властары был йылғалар буйҙарында йәшәүсе кешеләрҙе һыуҙың күтәрелеүенә һәм уның ярҙарҙан сығыу ихтималлығына әҙер булырға саҡыра. Өҫтәмә мәғлүмәт алыу өсөн даими рәүештә радио һәм телевизорҙарҙы ҡабыҙылған килеш торорға кәрәк. Ҡала халҡынан йылға ярҙары буйында планлаштырылған ялды күсереп тороуҙары һорала: ул ғүмер өсөн хәүефле. Берҙәм дежур-диспетчер хеҙмәтенең телефондары 05, 2-000-45, кәрәҙле телефондарҙан 112; 25-12-68 (авария-ҡотҡарыу отряды).

✓22 майҙан алып 24-нә тиклем Сибайҙа "Ирәндек моңдары" төбәкара башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар конкурсы уҙғарыла. Конкурста 35 йәшкә тиклемге үҙешмәкәр һәм профессиональ башҡарыусылар ҡатнаша ала. Башҡарыусылар 16 йәшкә тиклем һәм 16 йәштән алып 35 йәшкә тиклемге ике төркөмгә бүленә. Бәйгеселәр төрлө номинацияларҙа (оҙон көй, ҡыҫҡа көй) көс һынаша ала. Көс һынашыусылар башҡарылған әҫәрҙәрҙең тарихын белергә тейеш, һирәк яңғыраған фольклор өлгөләре хуплана.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...




**Бер оло йәштәге апай һөйләшеп торған еребеҙҙән: "Ярай, мин ҡуҙғалайым әле, югиһә, тиҙҙән Беренсе каналда балаларҙың "Голос"ы башлана", - тип ҡайтырға ашыкты. Үҙе уңайһыҙланғандай итте лә: "Шуларҙың йырлауҙарынан бигерәк һөйләүҙәрен тыңларға яратам. Бигерәк аҡыллы балалар, телмәрҙәренең байлығына, ололарса фекер йөрөтөүҙәренә иҫ китмәле бит, - тип өҫтәп ҡуйҙы. - Беҙҙең башҡорт балалары ла йыр-бейеүгә талантлы ул, анау "Сулпылар"ҙа нисек матур сығыш яһайҙар. Тик эш һөйләшеүгә ҡалһа, кәйефте төшөрә лә ҡуялар инде. Беҙҙә балаларҙы туған телдә фекерләргә өйрәтмәйҙәр..."**

# БӨГӨН КҮРҺӘ ИКӘН ПУШКИН...

## телмәр тота белмәгән беҙҙе

Урта йәштәрҙәге әңгәмәсебеҙ теманы дауам итте: "Мин үҙем төштән һуң "Юлдаш"та балалар өсөн викторина башланһа, радиоалғысты һүндереп ҡуям. Алып барыусы егет үҙе нисек яҡмайҙыр, әммә уның балалар ауыҙынан һәр һүҙҙе тартып-һуҙып алып ултырыуын тыңларға сабырлығым етмәй. Ҡыйыуһыҙҙар, тип әйтер инең, студияға шылтыратырға батырсылыҡ итәләр ҙаһә. Тик аралашыу кимәлдәре үтә бер ҡатлы, һүҙҙәре саҡ ҡына оҙонға һуҙылһа, русаһы килә һалып ҡыҫыла. Ни өсөн викторина яуаптарының теге йәки был вариантын һайлауын логик яҡтан нигеҙләй, фекерен иркен белдерә алған ҡыҙ-малайҙар бик һирәк икән хәҙер?.."

Был ике ханымдың да әйткәндәре менән килешә-килешә, баш ҡағып тыңланым. Тик балалар ғынамы ни? Мәҫәлән, "Телеүҙәк"те, башҡа тапшырыуҙарҙы ҡараған таныштарымдың өлкәндәрҙең дә тура эфирҙа башҡортса ике һүҙҙе лә ҡуша алмай, ыҡ-мыҡ итеп ултырыуҙарына үртәнгәндәренә йыш шаһит булам. Ә тормошта тағы ла хөртөрәк. Бына беҙҙең күпселек башҡорттар йәшәгән Әбйәлил районын ғына алайыҡ. Төрлө саралар, йыйылыш-кәңәшмәләр туған телдә үтә, тик уларҙа башҡортса төплө, матур, фекерен аңлайышлы итеп әйтеп, һүҙҙәрҙе дөрөҫ мәғәнәһендә ҡулланып сығыш яһаған кешеләр бик һирәк була. Ә русса оҫта һөйләй белеүселәр күп. Башҡорттар башҡортса һөйләй белгән кешегә аптырап та, һоҡланып та ҡарай.

Ниңә шулай килеп сыға һуң? Был хәлдең сәбәптәре күп, әлбиттә. Мин шуларҙың мөһим тип һанаған берәүһендә генә туҡталғым килә. Беҙ мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәре аҙ тип дыу ҡубабыҙ, әйтеп дәрестәрҙең иҫәбенә баҫым яһайбыҙ, ә бына телде өйрәнеүҙең сифаты тураһында һирәк һөйләйбеҙ. Ә бит бала үҙ телендә фекерләй, оҫта һөйләшә белһен өсөн уның телмәрен үҫтереүгә айырым иғтибар бүлергә, туҡтауһыҙ һөйләштерергә, диалогтар, әңгәмәләр ҡорорға өйрәтергә, дәрестәрҙә ижади эштәр менән күберәк шөғөлләнергә кәрәк. Ә беҙ уҡыусыларҙан килеш ялғауҙарын ятлауҙы, тултырыусыларҙың турамы-түгелме, ҡушма һөйләмдәрҙең эйәртеүлеме-эйәртеүһеҙме икәнен айырырға өйрәтеп, баштарын ҡатырабыҙ, телде яратыуҙан шулай үҙебеҙ үк ситләштерәбеҙ.

1988 йылда, БДУ-ның филология факультетының бишенсе курсында уҡығанда, тәнәфес мәлендә беҙҙең аудиторияға ҡырҡ йәштәрҙәге ир кеше килеп инеп, үҙен таныштырып һораны. "Бына һеҙ иртәгә ауылдарға балаларҙы башҡорт теленә өйрәтергә китә торған кешеләр, - тине ул. - Барғас, уҡыусыларҙың туған телен ни тиклем насар белеүен үҙегеҙ күрерһегеҙ. Улар русса ла яҡшы белмәй. Сөнки мәктәптәр балаларҙың башына грамматиканы тыңҡыслап тултыра, ә телмәрен үҫтереүгә иғтибар бирмәй. Шуға ла һеҙ, буласаҡ уҡытыусылар, дәреслектәргә йәбешеп ятмағыҙ, ә үҙегеҙҙең методикағыҙҙы булдырығыҙ (сөнки ундай методиканы ғалимдарыбыҙ эшләмәгән), башҡорт балаларын матур итеп үҙ телендә һөйләшергә өйрәтегеҙ". Беҙ был дөрөҫлөктө тәүгә ишетә инек. "Ә ниңә һеҙ тәнәфестә генә ҡасып-боҫоп тигәндәй һөйләйһегеҙ был хәбәрҙе? Ниңә уҡытыусыларыбыҙ үҙҙәре был хаҡта һөйләмәй?" - тип ҡыҙыҡһындыҡ. "Мәктәп программаһын һәм дәреслектәрен һеҙҙе уҡытҡан 65-70 йәшлек профессорҙар төҙөгән, улар һеҙҙе лә шул иҫкергән методика менән эшләргә өйрәтә. Шуға ла телде яңыса уҡытыу методикаһын ғәмәлгә ашырыу еңелдән түгел. Һәм уларҙың хаталары хаҡында һеҙгә ошо рәүешле генә еткерергә ҡала", - тине ағай кеше.

Был ағай нигеҙҙә хаҡлы булып сыҡты. Ысынлап та, мәктәпкә барғас, программа һәм дәреслектәр буйынса ғына уҡытһам, ҡағиҙәләр ятлатһам, балаларҙы үҙемдән һәм фәнемдән биҙҙерәсәкмен генә икәнлекте тиҙ арала аңланым. Минә уҡытыусы булып оҙаҡ эшләргә тура килмәне, ләкин үҙем эшләгән дәүерҙә баш ҡалаға яҡын бер райондағы башҡорт ауылының балаларын туған телде яратырға өйрәтә алыуыма ышанам. Ләкин шуныһы: беҙ уҡытҡан осорҙа башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән имтихандарҙа ижади инша яҙҙылар. Һуңынан телдән тестар, БДИ-лар барлыҡҡа килде. Уларҙа балалар әлеге лә баяғы шул грамматика буйынса аныҡ һорауҙарға яуап бирергә тейеш. Моғайын, минең матур-матур иншалар, шиғыр-хикәйәләр яҙған уҡыусыларым был тест, БДИ һынауҙарында өсло йә икеле алыр ине, тип уйлап ҡуям. Һәм бөгөнгө уҡытыусы уҡыусыһы БДИ-ны яҡшы тапшырһын өсөн генә лә төпсөрләп грамматика ҡағиҙәләренә өйрәтергә мәжбүр. Шулай булғас, телмәр үҫтереү эшен мәктәп программаларын һәм дәреслектәрен тамырынан үҙгәртеп ҡороу кимәлендә тормошҡа ашырырға кәрәк. Хәҙер профессорҙар ҙа икенсе шикелле, әммә бөгөнгө тел уҡытыусыларының әйтеүенсә, башҡорт телен уҡытыу һаман 20-30 йыл элеккенән әллә ни айырылмай...

Әйе, мин был мәҡәләмдә туған телде уҡытыу методикаһы менән риза булмауымды белдерергә теләйем. Мәҫәлән, мин мәктәптә математиканан бик насар уҡыным, уны алыу-ҡушыу, бүлеү-ҡабатлау кимәлендә генә белəм. Әммә был минә тормошта ниндәйҙер уңышҡа өлгәшергә ҡамасаулаһы, тип уйламайым. Шуның ише, грамматиканы белмәү матур итеп һөйләшеүгә ҡамасауламай. Ҡушма һөйләмдең теорияһын белгәнгә ҡарағанда, ҡушма һөйләм төҙөй белеү әһәмиәтлерәк түгелме ни?

Элек мәктәптә "Пушкин күргән телһеҙ башҡорттар бөгөн үҙ телендә уның шиғырҙарын уҡыйҙар", тигән шиғыр юлдарын ятлай торғайныҡ. Пушкин бөгөн күрһен ине ул "телһеҙ" башҡорттарҙы... Боронғо башҡорт, русса белмәгәс, фекерен, моғайын, үҙ телендә күпкә яҡшыраҡ аңлата алғандыр әле. Хәҙер берәй һүҙҙе белмәһәк йә иҫләй алмаһаҡ, автоматик рәүештә уның русса вариантын әйтәбеҙ ҙә, шулай ике телдән бутҡа бешерәбеҙ. Телевизор-радионан да ҡайны берәүҙәр ике телде бутап һөйләүен белә, уның араһында "русса әйткәндә" тип ҡыстырып, үҙҙәрен "аҡлап" ебәрә. Ҡайһыларына иһә, ауыҙ асырға ҡурҡып, алып барыусының хәбәрҙәренә "эйе" тип баш ҡағып ҡына ултырырға ҡала. Ә экранда был яғында тамашасылар: "Ниңә беҙҙең башҡорт был тиклем дә һөйләшә белмәй икән?"- тип ояла-ояла үртәнә, бәләкәй генә саҡтарынан тәтелдәп торған урыҫ балаларына аптырап ҡарай...

**Рәхимә МУСИНА.**

сып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (534 һум 42 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

● Республика ҡалаларында йәшәүселәр гәзитте почтанан үҙе барып алыу шарты (до востребования) менән **382 һум 50 тингә** яҙыла ала.

● **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Майҙа 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog. kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге кимәле буйынса Мәскәү ҡалаһы, Мәскәү һәм Төмән өлкәләре, Хабаровск крайы менән бер рәттән, Рәсәйҙең төбәктәр-лидерҙар бишлегенә инде. Хәлде анализлағанда белгестәр халыҡ-ара практикала ҡабул ителгән критерийҙарға таянған. Төбәктәрҙең аҙыҡ-түлек тауарҙары менән үҙ-үҙен тәьмин итеүе генә түгел, ә төрлө халыҡ ҡатламы өсөн уны һатып алыу мөмкинлеге лә иғтибарға алынған. Төрлө төбәктәрҙә аҙыҡ-түлектең арзанлығын баһалағанда эксперттар кешеләрҙең тукланыуға уртаса сығымдары менән рациональ продукттар йыйылмаһын сағыштырған.

✓Өфөлә ҡала төҙөклөгө ҡағиҙәләрен боҙоусылар өсөн штрафтарҙы арттырасаҡтар. Был хаҡта баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Ирек Ялалов хәбәр итте. Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексҡа төҙәтмәләр проектын БР Дәүләт Йыйылышы депутаттары әҙерләйәсәк. Күрше ҡалаларҙа - Ҡаҙанда һәм Екатеринбургта юридик шәхестәр өсөн штрафтар 100 мең һумға тиклем. Тәжрибә күрһәтеүенсә, бындай санкциялар ҡаланың тышҡы йөҙөнә ыңғай тәьсир итә.

✓Июндә Башҡортостандың баш ҡалаһы ҡарамағына 22 мең гектар урман күсәсәк. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов әйтеүенсә, ҡала, ниһайәт, урмандарҙы тейешле тәртипкә килтереп тота аласаҡ. Күсереү республика парламентарийҙары "Ер мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында"ғы законға үҙгәрештәр ҡабул иткәндән һуң мөмкин булды. Әлегә тиклем муниципалитет Өфөлә урынлашҡан урман участкаларына идара итә алмай ине. Хәҙер ҡала етәкселеге йәшел зоналарҙы тәртипкә килтерергә һәм уларҙы заманса ял итеү урындары итеп эшләргә ниәтләнә.

✓Өфөлә студенттар өсөн "Аҡбуҙат" I Бөтә Рәсәй ҡыҫҡа метражлы фильмдар фестивале октябрҙә үтәсәк. Сарала ижади йәштәр - 18 йәштән алып 25 йәшкә тиклемге урта һәм юғары һөнәри белем биреү учреждениелары студенттары ҡатнаша ала.

**"Башинформ"дан.**

*ТУҠТА, МӘЛ!*

# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!



Еңеү Паркында совет халҡының һәм Ҡораллы Көстәрҙең Бөйөк Ватан һуғышында фашистик Германияны еңеүенең рәсми символы - Еңеү Байрағын Өфө ҡалаһына тапшырыу тантанаһы үтте. Байраҡты ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы, СССР-ҙың летчик-космонавы, авиация генерал-майоры, Герой-ҡалалар дәүләт-ара союзы рәйесе Виктор Васильевич Горбатко тапшырҙы.






Өфө халҡы "Үлемһеҙ полк" Дөйөм Рәсәй гражданлыҡ-патриотик акцияһына ҡушылды. Тыныс тормош хаҡы өсөн фронтта һәм тылда үҙ ғүмерен йәлләмәй Еңеү көнөн яҡынайтыуға өлгәшкән һәр кем бөгөн дә еңеү маршында барырға тейеш. Шуның өсөн дә өфөләләр Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы атай-олатайҙары, туғандары тураһындағы мәғлүмәт менән фотоһын Ленин исемендәге майҙанға алып килде һәм тантаналы саф менән үтте.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ҺҮГЕНЕҮ ҺҮҘҘӘРЕ ТЫЙЫЛА

**РФ Президенты Владимир Путин телевидение тапшырыуҙарында һәм радиоэфирҙа, шулай уҡ кинопрокатта әҙәпһеҙ һүҙҙәр ҡулланыуҙы тыйҙы. Был туралағы документ дүшәмбе көн рәсми хоҡуҡ мәғлүмәте порталына урынлаштырылды, тип хәбәр итә "Яңылыҡтар"Рәсәй мәғлүмәт агентлығы.**

Апрель ахырында был закон проекты Федерация Советында раҫланғайны. Әйтеп кителеүенсә, әлеге закон телевидение һәм радиоэфирҙа, кинопрокатта, шулай уҡ халыҡ алдында сәнғәт әҫәрҙәрен башҡарған саҡта әҙәпһеҙ лексика файҙаланыуҙы тыя. Фильмда һүгенеү һүҙҙәре ҡулланылған осраҡта картинаны прокат таныҡлығынан мәхрүм итеү сараһы ҡарала. Шулай уҡ һүгенеү һүҙҙәре булған аудиовизуаль продукция һәм фонограмма даналарын (киң мәғлүмәт саралары продукцияһынан тыш), улар махсус төрөлгән булмаһа һәм "һүгенеү һүҙҙәре бар" тип яҙылмаған хәлдә, таратыу, һатыу рөхсәт ителмәй. Ҡабул ителгән законға ярашлы, был нормаларҙы боҙоу әҙәпһеҙ һүҙҙәр ҡулланғандағы кеүек үк, штрафҡа тарттырыласаҡ.

Законды боҙоу граждандар өсөн - 2-2,5 мең (56-70 доллар), вазифалы кешеләр өсөн - 4-5 мең (110-140 доллар), юридик шәхестәр өсөн 40-50 мең (1,1-1,4 мең доллар) һумға төшәсәк. Законды ҡабатлап боҙған хәлдә штраф күләме арттырыла (был хаҡта ентекләп документта әйтелгән).

Хәҙерге рус әҙәби тел нормаларына тап килмәгән һүҙҙәрҙе асыҡлау буйынса бойондороҡһоҙ экспертиза эшләйәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

# БӨТӨН ДОНЪЯ УЙЫНДАРЫ... Өфөгә килерме?

**Башҡортостандың Мәскәүҙәге вәкиллегендә 2021 йылда үтәсәк 11-се Бөтөн донъя уйындарын үткәреү хоҡуғын яулау өсөн Өфө ҡалаһының Заявка китабын әҙерләү һәм презентацияһын уҙғарыу мәсьәләһе буйынса кәңәшмә үтте. Сарала РФ Спорт министрлығы, Рәсәйҙең милли һәм Олимпиадаға инмәгән спорт төрҙәре комитеты вәкилдәре, программала ҡаралған спорт төрҙәре буйынса Бөтә Рәсәй федерациялары етәкселәре ҡатнашты.**

Әлеге ваҡытта Уйындарға индерелгән спорт төрҙәренең исемлеге билдәләнгән. Ул үҙенә төп 30 төрҙө ала - спорт аэробикаһы, художестволы гимнастика, батутта акробатика, спорт бейеүҙәре, роликтарҙа фигуралы шыуыу, роликтарҙа хоккей, һыу саңғыһы спорты, спорт ориентирлауы, һыуҙа кеше ғүмерен ҡотҡарыу, фрисби, ластар менән йөҙөү, ҡаяға үрмәләү спорты, парашют спорты, уҡтан атыу, пауэрлифтинг, бодибилдинг, арҡан тартыу, джиу-джитсу, сумо, каратэ, софтбол, нетбол, корфбол, фистбол, каноэ, поло, пляж гандболы, дуатлон. Бынан тыш, программаға биш күрһәтмә төрҙө индерергә мөмкин. Башҡортостан инде бында самбо, йәйге биатлон, пляж футболы, көрәш, пляж теннисын индерергә тәҡдим итә.

Ярыштарҙы уҙғарыу өсөн халыҡ-ара талаптарға тап килгән спорт базаһы ла булырға тейеш. Бөгөнгә 26 спорт ҡоролмаһы билдәләнгән. Шуларҙың 15-е уңышлы эшләй, ҡалғандарына реконструкция үткәрелә, ҡайһылары төҙөлөш стадияһында. Ярыштарҙы ҡайҙа уҙғарыу мәсьәләһенә арналған йомғаҡлау ултырышы 2015 йылда буласаҡ.

*ЙӨҘӨН КҮРЕП...*

# ТӨҘӘТЕП БӨТӨП БУЛЫРМЫ?

**Өфө ҡала округы хакимиәте эргәһендәге "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын ғәмәлгә ашырыу буйынса комиссияның терминология төркөмө бик һөҙөмтәле эш алып бара. Һәр хәлдә, төркөм ағзаларының даими үткәрелгән рейдтары һөҙөмтәһендә төрлө хаталы яҙыуҙар асыҡлана һәм төҙәтелә тора. Шул уҡ ваҡытта яңы предприятие, ойошмалар барлыҡҡа килеү менән бәйле уларҙың алтаҡталарында хаталы яҙыуҙар барлыҡҡа килә тора.**

Эйе, хаталы яҙыуҙар менән көрәштең осо-ҡырыйы күренмәҫ һымаҡ булып китә ҡайһы саҡта. Бынан бер нисә йыл элек "Киске Өфө" гәзите биттәрендә "улица Кустарная" тигән урам атамаһының башҡортса яҙылған бер нисә вариантын баҫып сығарғайныҡ. Уны "Кустар урамы" тип тә, "Кустарный урамы" тип тә тәржемә итеп маташҡайнылар. Беҙҙең гәзиттәге сығыштан һуң уны "Һөнәрселәр урамы" тип яҙып ҡуйҙылар.




"Большая Гражданская" урамын "Ҙур граждандар", "Оло граждан" һәм "Ҙур гражданская" урамы тип яҙып элеүҙәренә лә шаһит булғайныҡ. Бына тағы ла бер яңы миҫал (фотоларҙа). Революционер Шәһит Хоҙайбирҙиндың музейы урынлашҡан ҡыҫҡа ғына урамдың исемен башҡортса нисек дөрөҫ тәржемә итергә һуң? Был турала беҙгә яҙып ебәрегеҙ әле.

**Хаталарҙы Илдар ҒӘБИТОВ фотоға төшөрөп алды.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә тантаналы митингтар, байрам программалары, сәскә һалыу, шулай уҡ төрлө спорт саралары ойошторолдо. Айырым иғтибар үҫеп килгән быуынға бүленде. Апрель-май айҙары дауамында мәктәптәрҙә батырлыҡ дәрестәре үткәрелде, төрлө конкурстар, ярыштар, олимпиадалар ойошторолдо. Мәктәп уҡыусылары ҡаланың иҫтәлекле урындарына, музейҙарға экскурсияларҙа булды.

✓Еңеү көнөнә арналған байрам саралары баш ҡаланың бөтә майҙансыҡтарында ла ойошторолдо. Байрамды әҙерләүселар тантаналы сараларға халыҡтың бөтә ҡатламдарын, йәш төркөмдәрен йәлеп итергә, һуғыш һәм тыл ветерандарына тейешле иғтибар бирергә тырышты. Улар ҡала, республика етәкселеге, төрлө бағыусылар тарафынан әҙерләнгән бүләктәр менән бүләкләнде, транспорт сараларында бушлай йөрөү хоҡуғы алды, аҙыҡ-түлек магазиндарында ташламалар менән файҙаланды.

✓9 май көндө байрам саралары Еңеү паркындағы мәңгелек утҡа сәскә һалыу менән башланып китте. Унда республика, ҡала етәкселеге ҡатнашты. Байрам тантанаһына шулай уҡ республиканың хәрби комиссариаты, хәрби комендатура, Өфө юридик институты, кадет мәктәбе уҡыусылары һәм башҡалар йәлеп ителде. Һуңынан ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевҡа, 112-се кавалерия дивизияһы командирҙары Миңлеғәле Шайморатов һәм Таһир Күсимовтың һәйкәлдәренә сәскә һалыу менән дауам итте.

✓Байрам көнө "Динамо" стадионында ике ҙур сара үтте. Беренсеһе -1999 йылғы һәм унан кесерәк үҫмер ҡыҙҙар һәм егеттәр араһында шосселағы велоспорт буйынса Өфө ҡалаһының асыҡ беренселеге, икенсеһе - Өфө ҡалаһы хакимиәте һәм "Молодежная газета" редакцияһы призына еңел атлетика буйынса ярыш булды. Сарала йәмғеһе 200 команданан 2 мең тирәһе кеше ҡатнашты.

✓Ленин майҙанындағы тантаналар Рус драма театры алдындағы "Һалдат йөрәге" тип аталған концерт программаһы менән башланып китте. Бында өфөләләргә һәм баш ҡала ҡунаҡтарына ҙур булмаған хәрби техника күргәҙмәһе күрһәтелде. Инде йолаға әйләнгән "ялан кухня"һы һәр теләүсегә еңеүсе менюһын татып ҡарау мөмкинлеге бирҙе. Байрам саралары киске ун берҙә Ленин майҙанында фейерверк менән тамамланды.

✓ *Уйлап ҡараһаң, әгәр ҡасандыр һинеке булған ерҙәреңде халыҡ мәнфәғәтен хәстәрләү өсөн һайланған депутаттар сығарған закондарға ярашлы тартып алып бөтһөндәр ҙә, ҡайҙан булһын ул ватансылыҡ тойғоһо, тыуған илгә һөйөү?*

*БӘХӘС ҠОРО*

**Гәзитебеҙҙең даими авторы Айгөл Ахунова 11-се һандағы "Тарих һөйләйек йәштәргә" мәҡәләһендә шулай тип яҙа: " Хәҙер телевизорҙы асып булмай - гел ҡан ҡойош, шартлау, үлтереш, яуызлыҡ. Халыҡ яратҡан илен юғалтты, яңы төҙөлөүсе илде ҡабул итә алмай, баҙап ҡалды. "Ниндәй илдең патриоты булырға һуң?" - тип уйланабыҙ. Йәштәр илебеҙҙең, халҡыбыҙҙың һуғыш, аслыҡ, емереклек тигән ҡайғыларҙы үтеүен онотоп шашына, тип ғәйепләйбеҙ ҙә ул. Беҙ һөйләмәгәс, улар уны ҡайҙан белһен? Күп тапҡырҙар һөйләргә, иҫтәренә төшөрөргә кәрәк. Бигерәк тә Мәскәү урамдарында, теләһә ниндәй яҙыуҙар күтәреп, ғауғасылар аҡсаһына һатылып йөрөүсе йәштәрҙең иҫтәренә төшөшөрөргә кәрәк ил тарихын. 1941 - 1945 йылдарҙы үтеп, фашизмды еңгән данибыҙҙы 9 Майҙа ғына түгел, йыл әйләнәһенә һөйләйек йәштәргә, балаларға. Ошо батырлыҡ тарихын белһә, үҙ илен һөйһә, уның үҫешенә бөтә тырышлығын бағышлап йәшәйәсәк улар ҙа. Һәр хәлдә, шуға ышанғы килә".**

# ВАТАНСЫЛЫҠ НИҘӘН БАШЛАНА?



Статистика мәғлүмәттәре, ҡағыҙҙағы отчеттар, һандар буйынса, республикала йәш быуында ватансылыҡ тәрбиәләү йүнәлешендә күп нәмә эшләнә кеүек. Башҡортостанда, мәҫәлән, күп һанлы музейҙар эшләй, йәштәргә патриотик тәрбиә биреү һәм хәрби хеҙмәткә тиклемге әҙерлек үҙәге булдырылған. Бынан тыш, республикала волонтерҙар акциялары, уҡыу йорттары ҡарамағында Хәрби һәм Хеҙмәт Даны музейҙарының матди базаһын үҫтерергә кәрәк, тигән талап та ҡуябыҙ. Эйе, хәрби хеҙмәткә саҡырылыусыларҙы әҙерләгәндә физик культура, спорт мөһим әһәмиәткә эйә. Әммә улар ватансылыҡ тойғоһон тәрбиәләйме һуң? Һуңғы ваҡытта, ғөмүмән, ватансылыҡ тураһында һүҙ сыҡһа, уны ниңәлер хәрби хеҙмәткә генә ҡайтарып ҡалдыра башланыҡ. Ә аңлатмалы һүҙлектән ҡарағанда, ватансылыҡ (патриотизм) - Ватанына һөйөү, уға тоғролоҡ, үҙенден ғәмәлдәрең менән уға хеҙмәт итергә тырышыу ул. Ватансылыҡтың тарихи элементтары тыуған ергә, телгә, ғөрөф-ғәҙәттәргә бәйләнгәнлек сағылышында борондан формалашып килә. Философияға һәм фәнни ҡараштарға төшөп тормай ғына, ватансылыҡты ябай гражданин күҙлегенән сығып ҡарағанда, ул өс төшөнсәне үҙ эсенә ала - тыуған ер, туған тел, дин.

Борон атай-олатайҙарыбыҙҙа ни өсөн ватансылыҡ тойғоһо көслө булғанын аңлау өсөн тарихҡа өҫтән-мөҫтән генә күҙ йүгертеп сығыу ҙа етә: борон башҡорттоң ғына түгел, һәр кемдең ергә ерекҡәнлек тойғоһо булған. Башҡорттарҙа инде был тойғо аҫабалыҡ хоҡуғы булыуы менән дә өҫтөн торған. Шул уҡ ваҡытта ерен, дәүләтселеген йәнен аямай яҡлап һәм һаҡлап батша иҙеүенә ҡаршы бихисап ихтилалдарға күтәрелгән, ғәзиз ерен ҡанын түгеп, йәнен биреп һаҡлаған атай-олатайҙарыбыҙ дөйөм йортобоҙға - Рәсәйгә хәүеф янағанда, ил эсендәге талаш-тартышты туҡтатып тороп, уртаҡ йортобоҙҙо һаҡлау өсөн ил сигенә киткән. Улар өсөн махсус мәктәптәр ҙә, спорт секциялары ла, махсус әҙәбиәт тә, рухты күтәрерҙәй кинолар ҙа кәрәкмәгән. Бөгөн иһә бөтөн шарттар бар кеүек, әммә йәштәрҙә ватансылыҡ тойғоһо юҡ. Төптән уйлап ҡараһаң, әгәр ҡасандыр һинеке булған урмандарыңды, йылғаларыңды, ерҙәреңде халыҡ мәнфәғәтен хәстәрләү өсөн һайланған депутаттар сығарған закондарға ярашлы тартып алып бөтһөндәр ҙә, ҡайҙан булһын ул ватансылыҡ тойғоһо, тыуған илгә һөйөү? Патриоттарҙың күпмелер өлөшө ошо ерһеҙ, һыуһыҙ, өҫтөнә ағасы ауып торғанда ла урманһыҙ ҡалған быуындың өмөтө өҙөлөүе менән юҡҡа сыҡты. Тиҙҙән баҡсаңа терәлеп торған урманға еләк-емеш йыйырға ла рөхсәт менән инеп, эргәңдә генә ағып ятҡан йылғанан балыҡты ла рөхсәт менән генә тота башлар көндәргә лә күп ҡалманы, күрәһең. Был хаҡта үҙенең "Светя другим, сгораю..." тигән китабында профессор Венер Сәхәүетдинов шундай миҫал килтерә: "Белоретка етәрәк бер нисә урында урман яныуына шаһит булдым - йөҙ йәшлек ҡарағайҙарҙы 20 - 30 метр бейеклегендә ялҡын телдәре ялмағайны! Әммә телевизорҙан күрһәтелгәнсә, урман янғынын һүндереүсе бер генә самолет та, вертолет та, юлда бер генә янғын һүндереү машинаһы ла күренмәне. Асҡарға килеп еткәс, ошо хаҡта әсенеп һөйләйем. Миңә яуап итеп: "Ә был урмандарҙы Мәскәү олигархының ҡатыны һатып алған һәм улар бай кеҫәләләргә 49 йылға ҡуртымға бирелгән. Шуға күрә беҙгә унда инеү тыйыла, унда еләк-емеш, бәшмәк йыя, утын йәки бесән әҙерләй алмайбыҙ. Урман беҙҙеке булмағас, берәү ҙә уны һүндерергә бармаясаҡ. Элек берәй урында төтөн күренеп ҡалһа, тотош ауыл менән барып һүндерә торғайныҡ. Сөнки урман беҙҙең именлегебеҙ, тормошобоҙҙоң бер өлөшө ине. Кем, күпмегә был урмандарҙы һатҡандыр, беҙҙән, меңәр йыл ошонда йәшәүселәрҙән берәү ҙә һорап торманы", - тип яуапланылар".

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*ҺОРАУ-ЯУАП*

## ТЕРКӘҮ ҮТЕРГӘМЕ?

**Мин ғәрип бала менән өйҙә ултырам. Бер аҙ аҡса эшләү маҡсатында бала ҡараусы һәм репетитор булараҡ эш башларға иҫәп тотам. Бының өсөн ҡайҙалыр теркәү үтергә кәрәкме? Әгәр ҙә теркәү үтмәйенсә эшләгәндә был нимә менән янай?**

- Законға ярашлы, әгәр ҙә кешенең эшмәкәрлеге системалы булһа һәм килем килтерһә - ул эшмәкәрлек эшҡыуарлыҡ тип һанала. Репетиторлыҡ һәм бала ҡарау ҙа ошо билдәләмәгә тура килә. Шуға күрә, бындай эшмәкәрлек алып барған осраҡта шәхси эшҡыуар булараҡ һалым инспекцияһында теркәлеү мотлаҡ. Кире осраҡта эшмәкәрлек законға яраҡһыҙ, тип билдәләнәсәк һәм, кәм тигәндә, 500 һумдан алып 2000 һумға тиклем штрафҡа (РФ КоАП-ның 14-се статьяһы, 1-се пункты) йәки енәйәти яуаплылыҡҡа тарттырыласаҡ (РФ Енәйәт кодексының 171-се статьяһы). Шулай уҡ һалым түләмәгән һәм дәүләт теркәүе үтмәгән өсөн һалым инспекцияһы ла яуаплылыҡҡа тарттырырға мөмкин. Шуныһы ла бар: бала ҡарау һәм репетиторлыҡ өсөн рөхсәт ҡағыҙы (лицензия) кәрәкмәй.

## ХЕҘМӘТ КЕНӘГӘҺЕҘ

**Мин дүртенсе йыл хаҡлы ялда. Яңыраҡ үҙемә яраҡлы эш урыны таптым, ләкин хеҙмәт кенәгәмде юғалтыу сәбәпле, әле булһа урынлаша алмайым. Хеҙмәт кенәгәһеҙ ҙә эшкә урынлашырға буламы?**

-Был осраҡта эш биреүсе менән яҙма килешеү төҙөргә мөмкин. Бындай килешеү эш хаҡын, хеҙмәткәрҙең хеҙмәт бурыстарын һәм башҡа төрлө шарттарҙы раҫлаусы документ һаналасаҡ.

## ОЛО КЕШЕНЕ ҠАРАЙЫМ

**Йөрәк сире менән яфаланған улыма ғәриплек төркөмө бирҙеләр. Уны ҡараған өсөн мин пособие һәм уға ғәриплек буйынса пенсия алам. Минең ҡарамаҡта шулай уҡ иремдең 82 йәшлек өләсәһе лә бар. Пенсия фондына мөрәжәғәт итеп, оло йәштәге туғанымды ҡараған өсөн дә пенсия юллай аламмы?**

- Эшкә яраҡлы, ләкин 18 йәшкә тиклемге ғәрип баланы, ғәриплек буйынса бала саҡтан I төркөмгә ҡараған кешене һәм шулай уҡ 80 йәше тулған оло йәштәгеләрҙе ҡарау сәбәпле эшләмәгәндәргә ай һайын түләүҙәр ҡаралған. Тәүге ике төркөмгә ингәндәрҙе ҡарап, эшләмәй өйҙә ултырыусы әсәйгә (йәки атайға, ҡарауға алыусыға, опекунға) ай һайын 5500 һум күләмендә түләү ҡаралған. Ә оло йәштәгеләрҙе ҡараған өсөн айлыҡ түләүҙең күләме - 1200 һум. Шуға күрә һеҙгә ғариза һәм тейешле документтар менән урындағы Пенсия фондына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

## ИЛЛЕ ЙӘШТӘН

**Мартта минең һеңлемә 50 йәш тулды. Уның ире 1999 йылда вафат булды һәм һеңлемә 4 баланы бер үҙенә тәрбиәләргә тура килде. Эш стажы ла аҙ - ни бары 7 йыл да 8 ай. Һеңлем, күп бала әсәһе булараҡ, ҡартлыҡ буйынса хаҡлы ялға 50 йәшенән сыға аламы?**

- Ҡыҙғаныҫҡа күрә, уның бындай хоҡуғы юҡ, сөнки күп балалы тип 5 бала табып, уларҙы 8 йәшкә тиклем тәрбиәләгән һәм дөйөм эш стажы 15 йылдан да кәм булмаған ҡатын-ҡыҙ иҫәпләнә (РФ Федераль законы 28-се статьяһының 1-се пункты).

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡан баҫымын төшөрөү

❖ Юғары ҡан баҫымын төшөрөү өсөн 4 көн буйына сөгөлдөр һуты эсергә була. Кистән сөгөлдөр һутын һығып, төнгөлөккә һыуытҡысҡа ҡуяһың һәм йылы һыу өҫтәп, эсәһең. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан ҡабул итергә.

❖ 2 әфлисун, 1 лимонды әрсемәйенсә ит турағыстан үткәреп, 0,5 л иҙелгән мүк еләге (клюква), тәмenә ҡарап, шәкәр йәки бал өҫтәргә (ярты - ике стакан тирәһе). Көн һайын иртәле-кисле 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖ Йәйгеһен гипертония өйәнәген керән япрағы ярҙамында еңеләйтергә була. Уртаса ҙурлыҡтағы 3 япраҡты йыуып, сепрәк менән һөртөп, 2 япраҡты - маңлайға, 1-әүһен һул ҡултыҡ аҫтына бәйләргә. Төнгөлөккә ҡалдырырға ла ярай. Ҡышын керән тамырын ҡулланалар. Уны 3 өлөшкә бүлгәс, ҡайнар һыуҙа тотоп алаһың. 2 өлөш тамырҙы - маңлайға, береһен һул ҡултыҡ аҫтына бәйләйһең. Әгәр ҙә әсетеүгә түҙмәһәгеҙ, тамырҙың аҫтына марля һалығыҙ.

❖ Гипертония ваҡытында һыу процедуралары яҡшы ярҙам итә. Мәҫәлән, О. Кнейпп "шәле" түбәндәгесә яһала: иҫке кизе-мамыҡ простыняны һыуыҡ һыуға тығып, һығып алғас, шәл кеүек яурындарҙы урайһың. Түшәккә ятып, ҡалын юрған ябынаһың. Дауалау курсы - көн аша 7 тапҡыр, оҙайлығы - 1-1,5 сәғәт.

❖ Гәрсис йәки бөтнөк, мелисса япраҡтары төнәтмәһе яһап, аяҡ өсөн ванналар яһарға. Һыуҙың температураһы - 40-42 градус, процедураның оҙайлығы - 7-10 минут, көн аша. Бөтәһе 5-6 тапҡыр.

❖ Әгәр ҙә баш, йөрәк ауыртһа, муйынға, яурындарға, ҡалаҡ һөйәгенә 4 -6 горчичник ҡуйырға.

❖ Рауза, миләүшә, шалфей майы менән маңлайға, елкәгә, муйынға, яурын мускулдарына массаж яһау бик һөҙөмтәле сара.

❖ 1 стакан май балына 1 стакан һуған һуты ҡушып болғатырға, алдан ит турағыстан үткәреп әҙерләп ҡуйылған 50 грамм лимон ҡабығын һалып, быяла банкала һыуыҡ урында һаҡларға. Ашағандан һуң 2-3 сәғәт үткәс йәки ашарҙан 1 сәғәт алда 1 ҡалаҡ ҡабул итергә. Дауаланыу оҙайлығы - 2 ай.

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ТУҠЛАНЫУ ЙОЛАҺЫ

**Ҡунаҡ, байрам йәки көндәлек туҡланыу табындары ла билдәле бер тәртиптә башҡарылған. Өҫтәлгә ҡуйылған ризыҡҡа, һауыт-һабаға ҡарап, ғаиләнең матди хәлен генә түгел, ә табындың кемгә тәғәйенләнгәнен билдәләп булған. Ғөмүмән, аҙыҡ-түлек йоланың айырылғыһыҙ өлөшө иҫәпләнә, шуға ла ул халыҡтың матди ғына түгел, ә рухи мәҙәниәте элементы булып тора.**

Башҡорттарҙа табын тип башлыса байрамдар, ҡунаҡтар саҡырылған мәлдәрҙә ябылған өҫтәлгә әйтәләр. Көндәлек туҡланыу ваҡыттары иртәнге аш, иртәнге сәй, төшкө аш, киске аш, киске сәй тип атап йөрөтөлһә лә, байрам йәки берәй йолаға бәйле табын да аш, сәй табыны тип атала ала. Ҡатын-ҡыҙҙар ғына йыйыла икән, уларҙы сәйгә тип саҡыралар. Ир-ат ҡатнашлығында үткән ҡунаҡтарҙа аш төп урынды алып тора, шуға ла унда ашҡа саҡырыу формаһы ҡулланыла. Ә хәҙер көндәлек туҡланыуға бәйле йолаларҙы ҡарап үтәйек.

Билдәле булыуынса, туҡланыу нормалары ярым күсмә малсылыҡ-ер эшкәртеү хужалығы шарттарында барлыҡҡа килгән. XVIII-XIX быуаттарҙа йәйге һәм ҡышҡы йәшәү урыны булған башҡорттарҙың һәр миҙгелгә хас туҡланыу йолаһы ла булған. Йәйләүҙә етеш йәшәгән хәлле башҡорттар кейеҙ тирмә ҡорған, уның эсе бай итеп яҫтыҡтар, балаҫтар менән биҙәлгән. Урта хәллерәктәрҙең тирмәһе ябайыраҡ булһа, ситәндән, ағас ҡайырыһынан, таҡтанан яһалған аласыҡтарҙа йәшәүселәр ҙә булған. Урман-тау зонаһында йәйләүҙә ағас бүрәнәләрҙән ҡоролған бурама йорттар, конус рәүешендәге ҡыуыштар осраған. Торлаҡты биҙәү менән ҡатын-ҡыҙҙар шөғөлләнгән. Тирмә эсендә йыһаздар стена буйына ҡуйылған. Ишеккә ҡаршы урынлашҡан яҡ - түр тип йөрөтөлгән. Ул кейеҙ, балаҫ, ҡорама юрғандар менән биҙәлгән. Был урында ҡунаҡтар ҡабул иткәндәр, ғаиләгә эсендәге табындар ошонда ҡоролған. Ишектән ундағы яҡ ҡатын-ҡыҙҙар яғы булған. Ул шаршау менән айырылған. Ошонда уҡ аҙыҡ-түлек, самауыр, ҡаҙан, тире, ағас, туҙ һауыт-һаба һаҡланған. Ҡайһы бер ғаиләләрҙең ризыҡ әҙерләү һәм көн һайын туҡланыу өсөн махсус айырым тирмәһе булған. Башҡалар иһә ризыҡты тышта әҙерләгән. Ҡаҙан ҡуйылған урындың елдән һәм ямғырҙан һаҡланыу өсөн башы ябылған. Һауыт-һаба ҡуйыу, шулай уҡ ҡорот киптереү, ит ыҫлау өсөн ылаш ҡулланылған. Уның эргәһендә икмәк бешереү өсөн балсыҡтан йәки таштан мейес урынлашҡан. Хәлле башҡорттар йәйләүҙә ҡунаҡ тирмәләре тотҡан. Уны балаҫ, ҡул эштәре, байрамса һауыт-һаба, ҡорал менән биҙәгәндәр. Ишек төбөнә ҡымыҙлы тәпән, ағас ижау ҡуйылған. Ғаилә байрамдары ла ошо тирмәлә үткән.

Ҡышын башҡорттар бурап яһалған ағас йорттарҙа йәшәгән. Өй шулай уҡ ирҙәр (ҡунаҡ яғы) һәм ҡатындар (хужалыҡ алып барыу яғы) яғына бүленгән. Өйҙә йылытыу өсөн башлыса сыуал ҡулланылған. Ризыҡ әҙерләү өсөн уға ҡаҙан ҡуйылған. XIX быуатта В. М. Черемшанский Ырымбур башҡорттарының хужалығын һүрәтләп, шулай тип яҙып ҡалдырған: башҡорт ауылдарында йорттар тигеҙ рәткә теҙелгән, йорттар ихата менән уратып алынған, ат аҙбары, эре һәм ваҡ мал өсөн башы ябылған һарайҙар, келәт, баҡса, ырҙын һәм йорттарҙа аҡ мейестәр бар. Йортта ла иң ҡәҙерле урын ишектең ҡаршыһында урынлашҡан. Бында кейеҙ һәм балаҫтар түшәлгән киң урындыҡ торған, көндөҙ урындыҡта ултырып ашаһалар, төнөн ул йоҡлау урынына әүерелгән. Урындыҡ - башҡорт интерьерының төп элементы, уның бер яғына матурлап түшәк-ҡаралты, яҫтыҡтар өйөлгән.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

БӘХӘС ҠОРО

# ВАТАНСЫЛЫҠ НИҘӘН БАШЛАНА?

**(Башы 5-се биттә).**

Эйе, ватансылыҡ тойғоһо, нигеҙҙә, ер төшөнсәһенә бәйләнгән. Шуға ла ауыл халҡында был тойғо ҡала халҡына ҡарағанда күпкә көслөрәк тә. Ни тиһәң дә, уның йорто, ихатаһы, баҡса биләмәһе, аҙ булһа ла пайы бар (хәйер, ул пайҙары ла ҡағыҙҙа ғына). Ә ҡаланың күп фатирлы күп ҡатлы йорттарында йәшәүселә ул тойғо ҡайҙан барлыҡҡа килергә тейеш һуң?

Ватансылыҡ тойғоһон тыуҙырыусы икенсе фактор - ул тел. Бында ла үҙенән-үҙе ауыл менән ҡала араһында параллель үткәреү зарурлығы тыуа. Сөнки бөгөн телде һаҡлаусылар булып тап ауыл халҡы һәм ауылда тыуып үҫеүселәр тора. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуған көнө уңайынан белем усаҡтарында уҙғарылған саралар йәш быуында ватансылыҡтың бер сағылышы булған телһөйәрлектең ниндәй кимәлдә булыуын күрһәтте лә инде. Мәҫәлән, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты һ. б. уҡыу йорттары был көндө ысын мәғәнәһендә тел, рух байрамы сығанағы булып торҙо.

Ошо көндәрҙә социаль селтәрҙәрҙәң береһенә һалынған Татарстан Республикаһының Мәғариф министры Энгель Фәттәховтың шундай талабын да өлгө итеп килтерергә мөмкин: "Беҙҙә татар теле - дәүләт теле, шуға күрә икенсе тапҡыр кәңәшмәләр татар телендә уҙғарыласаҡ. Шулай уҡ эш буйынса ингәндә татарса мөрәжәғәт итегеҙ. Әгәр татар телен белмәһәгеҙ, хеҙмәткәрҙәрегеҙҙән тексты тәржемә иттереп алығыҙ, ингәс, шуны уҡырһығыҙ". Әлбиттә, етәксе шундай талап ҡуя һәм ул закон тарафынан нигеҙләнгән икән, бөрәү ҙә милли республикала йәшәп, быға ҡаршы сыҡмаясаҡ. Бына ҡайҙа ул ватансылыҡ, илһөйәрлек, телһөйәрлек сағылышы! Тел мәсьәләһенә килгәндә, ҡан-ҡәрҙәштәребеҙҙе бер нисә осраҡта өлгө итеп алырға мөмкин: татар теленә дәүләт статусы алғанда улар татар телен белгән хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡына 15 процент өҫтәмә түләү тураһындағы пунктты ла закондан һыҙып ташламаны, ә һаҡлап ҡалды; "Татарстан Республикаһында мәғариф тураһында" ТР Законына республика вуздарында татар теле дәүләт теле булараҡ уҡытылыуы ихтимал, тигән пунктты ҡабул итте. Бөгөн уларҙың барлыҡ, хатта техник уҡыу йорттарында ла татар теле дәүләт теле булараҡ өйрәнелә. Ә Башҡортостан парламенты депутаттары әҙмәгәтселек тарафынан тәҡдим ителгән ошо һәм башҡа пункттарға "күҙ йомдо". Шундай өлгө күрһәткәндән һуң, йәштәребеҙҙә ниндәй ватансылыҡ тәрбиәләргә тырышабыҙ һуң? Сөнки бөгөн ике йөҙлө заманда йәшәбеҙ - һүҙебеҙ эшебеҙ менән тап килмәй.

Өсөнсө төп категория - ул дин. Ислам динен башҡорттарға 630-сы (милади) йылда йәки 9-сы һижри йылда уҡ Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) үҙе иҫән саҡта ебәргән сәхәбәләр Зәйет улы Зөбәйер, Зөбәйер улы Абдрахман, Талха улы Усман килтергән. "Төрки халыҡтары араһында башҡорттар беренсе булып Ислам динен үҙ ихтыяры менән ҡабул иткән. Шуның өсөн дә башҡорт халҡы үҙ диненә, үҙ асылына тоғро, ихлас ҡалған. Ислам динендә йөҙҙәрсә йылдар айырым бер хөрмәт йәшәп килде: Бәйғәмбәребеҙгә, ата-бабаларыбыҙға, халыҡҡа, милләткә, телгә оло хөрмәт Ислам диненең төп нигеҙе ине", - тине үҙенең сөхбәттәрендә Шәйех Мәхмәт Әдил ән-Нәҡшбәндиә Башҡортостанға сәфәре ваҡытында.

Патриарх Алексий Икенсе лә ватансылыҡ тойғоһон айырым кешене һәм тотош халыҡты ил язмышы өсөн яуаплы итеүҙә күрә. "Патриотлыҡ булмағанда бындай яуаплылыҡ та булмай, - ти ул. - Әгәр мин халҡым тураһында уйламайым икән, тимәк, минең өйөм, тамырҙарым юҡ. Миненсә, тыуған халҡыңа һөйөү кеше өсөн Аллаһы Тәғәләгә булған һөйөү кеүек уҡ тәбиғи булырға тейеш. Әммә уны боҙорға мөмкин. Кешелек үҙ тарихында күпме генә Аллаһы Тәғәлә тарафынан һалынған тойғоно боҙорға тырышһа ла, ул һаман йәшәй".

Ә бөгөн, дөрөҫөн әйткәндә, ҡайҙа ысын дин, ҡайҙа ялған икәнен айырыуы еңел түгел. Дин артына ышыҡланып, ғаилә ҡороп, аннат ҡына талаҡ әйтеп айырылышыусылар ҙа, бер төрлө һөйләп, икенсе төрлө эшләүселәр ҙә, ауыр саҡтарында Аллаһы Тәғәләне ҡапыл иҫтәренә төшөрөп, мәсеткә йүгереүселәр ҙә, һуңынан инде, еңеллек килгәс, шатлыҡтарын шарап менән "йыуыусылар" ҙа осрап тора тормошобоҙҙа. Ахырҙа, дин бөгөн сираттағы мода шауҡымы кеүек күренә башлай. Ә бит уйлап ҡараһаң, тәү ситаттa, һәр кемдең үҙ иманы булырға, уға ярашлы һин кеше күргәндә нисек барһың, кеше күрмәгәндә лә шул халәттә ҡалырға тейешһең.

Эйе, бөгөн йәштәрҙә ватансылыҡ тойғоһо юҡ, тип саң ҡағабыҙ, уларҙа патриотлыҡ тәрбиәләү өсөн уңайлы шарттар тыуҙырырға тырышабыҙ. Ләкин асҡан күҙҙең нуры булмауын ғына онотабыҙ. Әгәр бөгөн беҙ ватансылыҡ тураһында ярһып һөйләгәндә, ата-бабалар тарихынан миҫалдар килтергәндә йәштәребеҙ: "Ә Ватанды ни өсөн яратырға?" - тигән һорау бирә икән, бәлки, уйланырға урын барҙыр? Сөнки совет йылдарында берҙәм совет кешеһен формалаштырабыҙ тигән принципты алға һөрөп, белем биреү фәҡәт рус телендә алып барылды, дин тураһында әйтеп тораһы ла түгел, ул халыҡ өсөн "әфиүн" ине. Тик ул йылдарҙа ер төшөнсәһе кешегә аяҡты ныҡ терәп торорлоҡ көс бирҙе. Яңы Рәсәй тарихы башланған мәлдә лә ватансылыҡ тойғоһо көслә, әммә ҡыҫҡа ғүмерле булды. Бөгөн көсләп-көсләп берҙәм Рәсәй кешеһен әүәләргә тырышабыҙ. Ысынлап та, шундай шарттарҙа ни өсөн Ватанды яратырға мөмкин һуң? Ярай, ауыл ерҙәрендә йәшәүселәрҙең һынар аяғында баҫып торорлоҡ булһа ла ере бар, мәктәптәрҙә туған телдәр уҡытыла, динде лә ян-яҡҡа тартҡыламайҙар һәм борғоламайҙар. Һәм әлеге ваҡытта ысын мәғәнәһендә ауылдар - ватансылыҡ тәрбиәләүҙең һандалы булып тора. Ләкин Рәсәй, гүйә, үгәй әсәй, ерҙәрҙе тартып алды, оптималләштереү һылтауы менән мәктәптәрҙе яба, ауылдарҙа производство юҡ, эш юҡ, аҡса юҡ. Ир-ат вахта ысулы менән ситкә китеп эшләй. Ауыл халҡы хәҙер ҡалаларҙа гастарбайтер ролен үтәй, ғаиләһен, балаларын ҡарайым тип, кеше тупһаһында йөрөргә мәжбүр. Хатта ейән-ейәнсәрҙәре тыуғансы ятаҡтың бер бүлмәһендә көн күреүселәр ҙә юҡ түгел. Йәштәр үҙҙәрен "йәш яҙыусы", "йәш эшсе", "йәш кадр" тип, йәше 50-гә еткәнсе йәш булып йөрөүселәр фонында икенсе ролдәрҙе башҡара. Һәм үҙенән-үҙе шундай һорау тыуа: "Ватанды ни өсөн яратырға?"

Эйе, бәлки, хәрби хеҙмәткәрҙәр, Ватанды һаҡлаусылар әҙерләүҙе кадет, спорт мәктәптәре асып, патриотик тәрбиә биреү клубтары ойоштороп хәл итеп булалыр, әммә ватансылыҡ тойғоһон тәрбиәләү икеле. Ватансылыҡ тойғоһо ул ерең, телең, динең берлегендә генә тыуыуы мөмкин. Ошо хаҡта ла онотмаһаҡ ине.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ТУКТА, МӘЛ!



Был фотола "Йегеҙ әле, егеттәр!" Баймаҡ районы ярыштарында ҡатнашҡан һәм йыл да призлы урындар яулаған Темәс урта мәктәбе йыйылма командаһы егеттәрен күрәһегеҙ. Бына улар - Ватанды һаҡлауҙы үҙ ҡулына алырға әҙерләнеүселәр! Урталарында - егеттәрҙең хәрби етәксеһе Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы Вәкил Рәхимйән улы Ишбулатов.

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# САЛАУАТ ЮЛАЕВ ИСЕМЕНДӘГЕ ПОЛК




## Полктың хәрби юлы

Хәрби әҙерлек тамамланғандан һуң, майор Кривенцов етәкселегендә полк 1-се Украина фронтына йүнәлтелә. 1943 йылдың 1 декабрендә ул хәрби хәрәкәттәр барған урынға килеп етә. Полк беренсе тапҡыр алышҡа 6 декабрҙә инә. Бәрелеш ҡаты була, ауыр яуҙарҙан хәрби часть еңеүсе булып сыға, дошман ғәскәрҙәренең танк атакаһын кире ҡаға. Яу барышында 48 фашист танкы, 300 немец һалдаты һәм офицеры юҡ ителә. Был ҙур уңыш була. Шулай ҙа полк та тиҙ генә тулыландырып булмаған юғалтыуҙар кисерә. 580 кешенең 24-е үлә, 35-е яралана, 123-е хәбәрһеҙ юғала. Яуҙан һуң полк комплектация үтеү өсөн һуғыш барған райондан сығарылып, Тамбов ҡалаһына тылға ебәрелә. 1944 йылдың февралендә полк составы офицер, сержант һәм һалдаттар менән тулылана. Шулай уҡ кәрәкле транспорт һәм ҡорал менән тәьмин ителә. Бынан һуң Житомир ҡалаһына күсерелә һәм йәйгә тиклем дауам иткән хәрби әҙерлек осоро башлана.

Яуға полк 1944 йылдың йәй уртаһында әҙер була. 16 июлдә 37-се айырым танктарҙы юҡ итеү артиллерия бригадаһы составында Житомир-Луцы маршруты буйынса марш эшләп, Лаврува районында урынлаша һәм 1-се гвардия танк армияһына беркетелә. М.Е. Катуков етәкселегендәге танк армияһы 1-се Украина фронты составында дошмандың "Төньяҡ Украина" армиялар төркөмөнә ҡаршы алыш алып бара. Шулай итеп, полк икенсе тапҡыр хәрби хәрәкәттәр барған районға эләгә.

25 июлдә хәрби часть, 46-сы гвардия танк бригадаһы менән берлектә, Родымино районы янында Сан йылғаһын кисә. Дошмандың контратакаһын кире ҡағып, транспорттың һәм кешеләрҙең йылға аша сығыуын тәьмин итә. Был яуҙы полк уңышлы үтә. Дошмандың танктары, үҙйөрөшлө артиллерия ҡулланмалары, танктарға ҡаршы орудиелары, пулеметтары, миномет батареялары юҡ ителә, шулай уҡ фашистар 170 һалдатын һәм сержантын юғалта. Салауат Юлаев исемендәге полк үҙе юғалтыуҙар кисермәй. Уңышлы яуҙан һуң, 27-28 июлдә, хәрби часть 11-се гвардия танк корпусы составында Перемышль-Сандомур йүнәлешендә рейд эшләй һәм 31 июлдән 1 августҡа ҡарай төндә Копшевница районында 40-сы танк бригадаһы составында Висла йылғаһын кисә. 1-4 августа сираттағы алышҡа инә. Был бәрелеш ваҡытында полк дошмандың ике борамын, 2 үҙйөрөшлө орудиеһын, 2 күҙәтеү пунктын һәм башҡа күп транспортты юҡ итә. 300 һалдат һәм офицер юҡ ителә һәм яралана. Полктың үҙ юғалтыуҙары 8 кеше була.

Ошонан һуң полк тағы ла бер нисә рейдта ҡатнаша. Көнбайыш Украинаны һәм Польшаны азат итеүсе ғәскәрҙәр сафында була. Лопота ауылы янындағы алыштарҙа көсөргәнешле һуғыштан һуң полк күп юғалтыуҙар кисерә. Кеше һәм ҡоралдарға ихтыяж кисерә. Ҡабаттан тулыландырыу талап ителә. Был юлы тулыланыу өсөн улар тылға ебәрелмәй, хәрби шарттар талап итеүенсә, фронттың алғы һыҙығында Богория районында ҡала. Хәрби состав тулыланғандан һуң, 1944 йылдың 15 сентябрендә, полк Богория-Красно маршруты буйынса марш яһай. Оҙаклай Поляна ауылы янында алыштарға инә һәм дошманды ҡыйрата. Фашистарҙың 6 танкын, 2 танкты юҡ итеү орудиеһын, 800-ҙән ашыу һалдат-офицерын юҡ итә.

Һуңынан полк Сандомир плацдармында артиллерия һөжүмендә ҡатнаша. 52-се армия составында сигенгән фашист көстәрен Хмельник, Енджеюв, Кружлев, Жутно, Родомско, Вжесня ҡалаларынан ҡыуа. 19 ғинуарҙа полк дошманды эҙәрлекләп, Одер ярҙарына килеп етә. Бреслау ҡалаһын уратып ала, Кант ҡалаһы янында дошман ғәскәрҙәрен тар-мар итә. 1945 йылдың 7 майында башҡа совет ғәскәрҙәре менән берлектә Штригау ҡалаһын яулауҙа ҡатнаша. 8-10 май көндәрендә немецтарҙың һуңғы ҡаршылыҡ көстәренә ҡаршы һуғыш алып бара. 1945 йылдың 13 майында полк хәрби хәрәкәттәр барған райондан сығарыла һәм Чехословакияның Трутенау ҡалаһында урынлаштырыла.

Үҙенең хәрби юлында полк 79 танкты, 13 үҙйөрөшлө орудиены, 38 танкҡа ҡаршы орудиены, 11 миномет батареяһын, 22 пулеметты, 4 күҙәтеү пунктын һәм бик күп дошман транспортын, һалдаттарын юҡ итә. Хәрби часть яуҙар менән 2154 километр ер үтә. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн күп һалдат һәм офицерҙар орден-миҙалдар менән наградалана.

## Йомғаҡлау һүҙе урынына

Салауат Юлаев исемендәге 1292-се танктарға ҡаршы Башҡорт истребитель артиллерия полкы данлы юл үткән үҙенсәлекле хәрби часть. Бөтә алыштар барышында ул үҙен ҡеүәтле хәрби берәмек итеп күрһәтә. Башҡорт АССР-ының эске ресурстарынан ойошторолған часть республика халҡының ышанысын аҡлай. Эйе, көсөргәнешле алыштарҙа күп юғалтыуҙар кисереү сәбәпле, состав даими рәүештә үҙгәреп тора. Башҡортостан халҡынан ғына ойошторолған составтан һуңынан әҙ генә кеше ҡала. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, полк үҙенең атамаһын үҙгәртмәй, еңеүҙе Салауат Юлаев исемендәге 1292-се танктарға ҡаршы Башҡорт истребитель артиллерия полкы исеме менән ҡаршы ала.

Һуңғы был һуғыш тамамланыуға ла байтаҡ ваҡыт үтте, киләһе йыл уның 70 йыллығын билдәләйәсәкбеҙ. Шулай ҙа бөгөнгө көнгәсә был һуғыш тарихының күп биттәре, шулай уҡ Башҡортостандың хәрби даны өйрәнелмәй ҡалыуҙы дауам итә. Бигерәк тә айырым төбәктәрҙең еңеүгә индергән өлөшөн тикшереү эше йәнләндерелергә тейеш. Был ошо төбәктәрҙә йәшәгән халыҡтың үҙаңы үҫеүгә, уларға үҙҙәренең тарихи үткәне өсөн ғорурлыҡ тойғоһон, илһөйәрлекте үҫтереүгә булышлыҡ итер ине. Үрҙә телгә алынған полкҡа яҙыусыларҙың һәм публицистарҙың да һаман да иғтибар итмәүе ғәжәпләндерә. Бер яу барышында ғына 48 танкты юҡ итеүсе хәрби берәмек һуғыш ваҡытында һирәк осраған күренеш. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Башҡортостан тарихы буйынса китапҡа ошо мәғлүмәт индерелмәгән.

**Михаил БИКМЕЕВ, тарих фәндәре докторы.**

**(Аҙағы. Башы 18-се һанда).**







БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Башҡорттарҙың торлағы араһында шулай уҡ ағас тирмә лә осрай. Был йыйылма торлаҡ алты ҡырлы пирамида ҡыйыҡлы алты ҡырлы призма формаһында. Стеналарының һәм ҡыйығының барлыҡ яҡтары ла айырым ағас ҡыҫандарҙан тора һәм улар йышылған таҡта менән көпләнгән (һүрәт). Стена менән ҡыйыҡ тимер ырғаҡтар ярҙамында нығытыла. Стенаның береһендә тәҙрә уйыла, икенсеһендә - ишек. Был торлаҡ еңел генә һүтелеп, күсереп йөрөтөү өсөн уңайлы була. Улар бер-береһенән биҙәлеше буйынса ғына айырыла. Бай башҡорттар хатта бындай торлаҡтың эсен майлы буяу менән буяй. Уның дәүмәле ҙур түгел, диаметры 4 метр самаһы.



Башҡорттарҙа киң таралған күсмә торлаҡ булып тирмә тора. Әммә ул байҙарҙа ғына була. Формаһы буйынса тирмәнең ике төрө айырыла. Береһе әҙәбиәттә монгол тирмәһе, икенсеһе төркиҙәрҙеке булараҡ билдәле. Беренсе төр Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында тарала. Ул биш-алты йыйылма ҡанаттан тора. Улар ишек менән бергә тирмәнең аҫҡы нигеҙен тәшкил итә; өҫкө - цилиндрик яғы 60-80 нәҙек, уҡлы һайғауҙан тора. Иң өҫкә сағыраҡ йәки саңыраҡ нығытыла. Тирмә 5-7 кейеҙ менән көпләнә. Тирмә ҡорғанда иң тәүҙә уның ҡанаттары ҡуйыла. Яҫы, еңелсә бөгөлгән, үҙ-ара ҡайыштар ярҙамында нығытылған рейкалар ишек ҡыҫанына ныҡ итеп бәйләнә. Өҫкө ситенән ҡуйылған рәшәткә баш ҡор йәки ҡылдан ишелгән бау менән уратыла. Баш ҡор рәшәткә нигеҙгә тирмәнең өҫкө өлөшөнөң ауырлығы аҫтында ян-яҡҡа китеү мөмкинлеген бирмәй. Бынан тыш, рәшәткә ергә ҡағыла, икеһе ишек ҡабы эргәһендә ҡаҙыҡҡа бәйләп ҡуйыла. Уҡтан торған өҫкө конус рәшәткәнең ситендәге өҫкө рейкаға уҡтың аҫҡы яғына элмәктәр ярҙамында нығытыла. Сағыраҡ өҫкө осо сағыраҡтың төп ҡулсаһы тишегенә ҡуйылған уҡҡа ултыртыла. Тирмә көпләнгән кейеҙ нигеҙгә айырым бау ярҙамында бәйләнә. Ә ныҡлыҡ өсөн тыштан арҡан менән уратыла һәм ергә ҡаҙаҡланған ҡаҙыҡтарға бәйләнә. Дүрт мөйөш формаһындағы төндөк бау менән сырмалмай; төнөн һәм насар һауа торошо булғанда ул тирмәгә бау менән бәйләнә, көндөҙ ул урап ҡуйыла йәки һырғауыл ярҙамында асыла (һүрәт, унда).



Төрки тирмәһе монгол тирмәһенән уҡтарҙың бөгөлгән булыуы менән айырыла. Шуға күрә тирмәнең өҫ яғы конус формаһында түгел, ә ярымшар формаһында була (һүрәт, һулда). Бынан тыш, уның ишеге ике яҡҡа асылмалы була, ә монгол тирмәһенеке - бер яҡҡа ғына асыла. Шулай уҡ, төрки, йәғни көньяҡ башҡорттары тирмәһенең нигеҙе һәр саҡ ҡыҙыл буяу менән буяла. Ул ҡаҙаҡ тирмәһенән әллә ин айырылмай.

*✓ Шулай ҙа шомландыра. Хәлдәрҙең киҫкенләшеп китеүе бер кемгә лә файҙа килтермәйәсәге көн кеүек асыҡ. Араларҙы боҙмаҫҡа, аралашыу ишектәрен япмаҫҡа ине.*

**Алтмыш туғыҙынсы тапҡыр Еңеү көнөн байрам итәбеҙ. Йылдар менән бергә ошо еңеүҙе яулаған ветерандар һаны ла кәмей бара. Улар менән бергә хәтер ҙә китә. Еңеүселәр, улар хаҡында иҫтәлектәр китаптарҙа, фильмдарҙа йәшәй йәшәүен. Ләкин XX быуаттың иң оло афәтенең ғибрәте онотола. Еңгәндәр ҙә, еңелгәндәр ҙә онота уны. Әле бер ерҙә, әле икенсе урында дәүләттәр ҡоралға тотона. Нисек тоя үҙен был мәлдә һуғыш афәтен үҙ иңендә күтәргән ветерандар? Ошо һәм башҡа һорауҙар менән Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, өлкән журналист-яҙыусы Рамаҙан Нурғәли улы ҠОТОШОВ менән Башҡортостан Республикаһының Ветерандар советы рәйесе Марат Сабит улы МУЛЛАҒӘЛЛӘМОВҡа мөрәжәғәт иттек.**

# Ветерандар хәҡиҡәте...

## йәш быуынға ла һабаҡ бирһен

**Бөйөк Ватан һуғышы ауырлыҡтарын кисергән оло быуын кешеләре әле донъяла барған низағтарҙы, фетнәләрҙе, ғөмүмән, төрлө заман һынауҙарын нисек ҡабул итә, нисек кисерә икән?**

**Рамаҙан Ҡотошов:** Һуғыш ваҡытында окопта ятҡан мәлдәребеҙҙә "Бына ошо ҡәһәрле һуғыш бөтөр ҙә, әҙәм балаһы башҡа бер тапҡыр ҙа һуғыш ҡоралына тотонмаҫ", тип уйлай торғайныҡ. Ул һуғыш тамамланғандан һуң етмеш йылға яҡын ваҡыт үтте, әммә ошо ваҡыт эсендә донъяла бер генә тыныс көн булды микән? Йә бер урында, йә икенсе урында үлтереш уты ҡабынып ҡына торҙо. Киләһе һуғыштың Бөйөк Ватан һуғышынан да ҡурҡынысыраҡ булыуы ихтимал бит, тигән шом бер ваҡытта ла күңелгә тынғы бирмәне. Бөгөн был ҡурҡыныс йәнә илебеҙ сиктәренә үк килеп етте. Күрше Украинала болғаныш бара. Әгәр ҙә унда граждандар һуғышы башланып китһә, туғандар бер-береһен үлтергән ошо һуғыштан да яманы булырмы икән? Аллаһ һаҡлаһын!

Нимә уйлай әҙәм балаһы, ниңә һуғышһыҙ йәшәй алмай? Ниңә сиге булмаған, ғәҙеллек менән бүлгәндә барыһына ла еткән байлыҡтарҙы бүлешә алмайбыҙ? Ниңә ил башлыҡтары быға юл ҡуя, ниңә көсөргәнешле мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеп хәл итмәй? Ошо һорауҙар тынғы бирмәй. Һуғыш тоҡанып китһә, кешелек бик ҡыйын хәлдә тороп ҡаласаҡ бит. Әлеге һуғышты теге һуғыш менән сағыштырыу мөмкин түгел. Теге һуғышта беҙ окоптарға йәшенһәк, иҫән ҡаласағыбыҙға шикләнмәй инек. Исмаһам, тере ҡалыу мөмкинлеге ҙур ине. Ә хәҙерге ҡоралдар, атом бомбалары - улар кешеләрҙе генә түгел, бар тереклекте юҡ итеү көсөнә эйә. Башҡортостан кеүек территориялағы бар халыҡты ҡырып бөтөү өсөн бер бомба етәсәк. Был ҡурҡыныс беҙгә генә түгел, бөтә илдәргә, халыҡтарға ла янай. Һуғыш ҡурҡынысын бөтөрөп, ҡоралланыуҙағы уҙышыуҙы туҡтатып, килешеү өҫтәленә ултырмаһаҡ, кешелек юҡҡа сығыуы мөмкин.

Бар ошо низағтарҙың нигеҙендә ҡомһоҙлоҡ, нәфсе ята икәне ап-асыҡ. Һуғыштар ошо сәбәптәрҙән башлана. Уны нәфсеһенә баш булмаған бәреү башлай, ә ябай халыҡ ҡырыла. Кешенең яман яғы был.

Әлеге көндә беҙҙең илдә идеология, уртаҡ маҡсат, ҡиммәттәр юҡ. Совет осоронда ундай идеология бар ине. Халыҡ, коммунизм төҙөйбөҙ, тип тырышты. Коммунизм идеяһы - ул яҡшы тормош, һәр кем өсөн яраткан хеҙмәт, балалар үҫтереү, уларға лайыҡлы белем биреү һәм башҡа изге маҡсаттарға ынтылыш идеяһы ине. Ә хәҙер нимә төҙөйбөҙ беҙ? Коммунизм идеяһын кәрәкмәгән нәмә тип юҡҡа сығарғас-сығарғас, уның урынына тормошто алға алып барырҙай башҡа идеялар уйлап сығарырға кәрәк ине бит. Хәҙер тормошобоҙҙа оло бушлыҡ барлыҡҡа килде. Уны кем тултырыр? Дингә ҡайтабыҙ, дингә ылығабыҙ, тибеҙ, әммә дин ошо бушлыҡты тулыһынса тултыра микән? Эйе, һәр ерҙә мәсеттәр ҡалҡа, әммә уларға халыҡ йөрөмәй. Дин әһелдәренең һүҙе, тауышы халыҡҡа барып етмәй әле һаман. Халыҡҡа еткерерлек итеп вәғәз тотор абруйлы дин әһелдәре лә бармаҡ менән һанарлыҡ. Ә шулай ҙа дөйөм дәүләт идеологиялары күтәрелмәгән бөгөнгө мәлдә барыбер ҙә өмөт динебеҙгә барып терәлә...





***Нимә уйлай әҙәм балаһы, ниңә һуғышһыҙ йәшәй алмай? Ниңә сиге булмаған, ғәҙеллек менән бүлгәндә барыһына ла еткән байлыҡтарҙы бүлешә алмайбыҙ? Ниңә ил башлыҡтары быға юл ҡуя, ниңә көсөргәнешле мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеп хәл итмәй? Ошо һорауҙар тынғы бирмәй. Һуғыш тоҡанып китһә, кешелек бик ҡыйын хәлдә тороп ҡаласаҡ бит. Әлеге һуғышты теге һуғыш менән сағыштырыу мөмкин түгел. Теге һуғышта беҙ окоптарға йәшенһәк, иҫән ҡаласағыбыҙға шикләнмәй инек. Исмаһам, тере ҡалыу мөмкинлеге ҙур ине. Ә хәҙерге ҡоралдар, атом бомбалары - улар кешеләрҙе генә түгел, бар тереклекте юҡ итеү көсөнә эйә. Башҡортостан кеүек территориялағы бар халыҡты ҡырып бөтөү өсөн бер бомба етәсәк. Был ҡурҡыныс беҙгә генә түгел, бөтә илдәргә, халыҡтарға ла янай. Һуғыш ҡурҡынысын бөтөрөп, ҡоралланыуҙағы уҙышыуҙы туҡтатып, килешеү өҫтәленә ултырмаһаҡ, кешелек юҡҡа сығыуы мөмкин.***

**Марат Муллағәлләмов:** Халҡыбыҙҙың ҡаһарманлыҡ, батырлыҡ өлгөһөн һынландырған Еңеү көнө беҙҙең республика халҡы өсөн дә ҙур байрам ул. Һандар теле менән һөйләгәндә, Башҡортостандан ғына 600 меңдән ашыу кеше фронтҡа алына. Уларҙың яртыһынан күберәге, 322 мене, яу яландарында ятып ҡала. Беҙҙең республиканан һуғышҡа алынған яугирҙарҙың 278-е Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Улар араһында тиңһеҙ батырлыҡ өлгөһө күрһәткән - күкрәктәре менән амбразура утын ҡаплаған Матросов-Мөхәмәтйәнов, Ғөбәйҙуллин да бар. Көйөргәҙе районында Кинйә Абыҙ тип аталған ҙур булмаған башҡорт ауылы бар. Ошо ауылдан ғына ла 3 Советтар Союзы Геройы сыҡҡан. Һуғыш йылдарында беҙҙең республика фронтҡа 160 миллион бот иген, 980 мең центнер ит ебәргән. Республикала 5 миллион тонна нефть сығарылған, һәр өсөнсө танк, һәр бишенсе самолет беҙҙең яғыулыҡ менән алға ынтылған. Тимәк, республика халҡы фронтта ла, тылда ла ошо еңеүҙе яҡынайтыуға, яулауға үҙ өлөшөн индергән. Әммә был ҙур Советтар иле халыҡтарының уртаҡ еңеүе. Шуға күрә лә ошо һуғыш ыҙаларын бергә-бергә күтәрешкән кешеләрҙең балалары, ейәндәренең дөйөм тарихыбыҙға төкөрөп тигәндәй ҡарауына йән әрней. Украинаны әйтәм... Әлбиттә, мин бар украиндар ҙа беҙгә, Рәсәй халҡына нәфрәт менән ҡарай, тип әйтмәҫ инем. Быға ышанырлыҡ түгел. Совет осоронда Украинала булырға тура килде, ул ваҡытта әле ул союздаш республика ине. Рәсәйгә ҡарата мөнәсәбәттәре яҡшы ине ундағы халыҡтың. Башҡортостан менән дә дуҫлыҡ ептәре бәйләй украиндарҙы. Һуғыш йылдарында күп предприятиелар, дәүләт ойошмалары, зыялылар Украинанан Өфөгә эвакуацияланған. Был хаҡта беҙҙә лә, уларҙа ла яҡшы хәтирәләр һаҡлана. Шуға ла украин халҡының күпселегенең әле барған авантюраға ҡыҫылышы юҡтыр, тип ышанам.

Эйе, Украина тирәләй ҡуйырған хәлдәр ябай түгел. АҠШ, НАТО-ға көслө Рәсәй кәрәкмәй, шуға ла улар төрлө юлдар менән - иҡтисади яҡтан да, сәйәси яҡтан да илебеҙҙе ҡыҫырға теләй. Тарихтан белеүебеҙсә, был беренсе тапҡыр ғына түгел. Әммә был юлы ла беҙҙе ҡурҡытырға тырышыу килеп сыҡмаҫ, тип ышанам. Рәсәй күп милләтле дәүләт. Илһөйәрлек тә әле ҡоро һүҙ генә булып ҡалмағандыр. Шулай ҙа шомландыра. Хәлдәрҙең киҫкенләшеп китеүе бер кемгә лә файҙа килтермәйәсәге көн кеүек асыҡ. Араларҙы боҙмаҫҡа, аралашыу ишектәрен япмаҫҡа ине. Ошондай хәлдә Ҡырым, Севастополь үҙенең киләсәге өсөн дөрөҫ юл һайланы, тип уйлайым. Әлеге ваҡытта Украинаның көнсығыш төбәктәренең федерализм яҡлы булыуын да дөрөҫ тип табам. Ни өсөн тигәндә, бер нисә милләтле дәүләт өсөн был иң уңайлы юл. Тик идеаль федераль ҡоролошо булған Американың ғына ошо талаптарға ҡаршы булыуын аңлай алмайым. Был бары Рәсәйгә баҫым яһарға тырышыу ғыналыр инде.

Эйе, беҙҙе, өлкән быуынды, илебеҙҙәге хәл ителмәгән башҡа мәсьәләләр ҙә борсой. Мин социаль пландағыларын ғына күҙ уңында тотам әле. Халыҡтың социаль хәле, социаль именлеге нимә икәнен бер ҡасан да оноторға ярамай. Ошо именлек, уңайлыҡтар өсөн халыҡ быуаттар буйы һуғышҡан, һуғышырға мәжбүр булған. Айырым кешеләр, чиновниктар, етәкселеккә яҡын булған олигархтар дөйөм байлыҡты үҙләштереүҙе туҡтатһын, халыҡҡа тәғәйен "ризыҡты" ҡомһоҙ эт кеүек ашамаһын ине, тип әйтке килә. Был бик етди мәсьәлә.

Хәл ителергә тейешле мәсьәләләрҙе һанай китһәң, осона сығып булмаҫ. Берҙән, эш хаҡтарын, пенсияларҙы тейешле кимәлгә күтәрмәйенсә тороп, тормошобоҙҙоң алға

китеше хаҡында һүҙ йөрөтөү мөмкин түгел. Икенсенән, ауылдарҙың бөтөүе менән дә бер нисек тә килешеп булмай. Өсөнсөнән, балалар юҡ, тип мәктәптәрҙе ябыу башҡа һыймаған хәл. Ата-әсәләр ауыр тойғо, борсолоу менән беренсе синыфта уҡыған балаһын тиҫтәләрсә саҡрым арала ятҡан ауылға уҡырға йөрөтөргә мәжбүр. Юрамал эшләнәме был, әллә заманы шулаймы, һис аңлашылмай. Ауылдарҙы йәшәтеү өсөн эш урындары кәрәк икәне бәхәсһеҙ, ә бының өсөн коллектив хужалыҡтарҙы тергеҙеү кәрәк. Шунһыҙ, ауыл хужалығын нисек күтәрмәк кәрәк? Ауыл хужалығын бөлдөрҙөк тә, сит ил аҙыҡ-түлегенә көнөбөҙ ҡалды. Хәҙер магазиндарҙағы тауарҙың 80 проценты ситтән килтерелгән. Ҡара тупрағы булмаған Мысыр, Израилдең картуфын ашайбыҙ.

Ҡалаларҙа ла сәнәғәт предприятиелары эшләүҙән туҡтаны. Оффшор фирмалар барлыҡҡа килде. Был бит илде асыктан-асыҡ талау, үҙ халҡыңды хөрмәт итмәүҙең асыҡ миҫалы. Ошо хәлдәргә юл ҡуйыусылар илһөйәрлек хаҡында һөйләй аламы? Украиналағы ғына түгел, Ҡырғыҙстанда, элекке башҡа союздаш республикаларҙа булған низағтар нигеҙендә лә социаль мәсьәләләр һуңғы роль уйнаманы. Беҙ хәлдәрҙең киҫкенләшеп китеүен теләмәҫ инек. Ләкин иң киҫкене - милли мәсьәлә. Жириновский кеүек дыуамал баштарҙың Рәсәйҙең урыҫ булмаған милләттәре адресына ҡарата әйтелгән мыҫҡыллы һүҙҙәре, милли республикаларҙы бөтөрөргә тәҡдим итеүе дәүләт сәйәсәтендә яҡлау табып, тормошҡа ашырылып ҡуймаһайы, тип тә уйлана бөгөн өлкән быуын...

**▸ Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын төрлө льготалар, пенсия менән булһа ла ҡыуандырыу - дәүләт бурысы. Ул нисек тормошҡа ашырыла? Оло быуынға тейешле иғтибар, хөрмәт күрһәтелә, тип иҫәпләйһегеҙме?**

**Рамаҙан Ҡотошов:** Беҙҙең ил - еңеүсе ил. Еңеүсе ил булғас, ана шул еңеүҙе яулаған, тәьмин иткән кешеләрҙе ҡәҙерләп, ҙурлап, бар яҡлап хөрмәт күрһәтергә тейешбеҙ. Әлбиттә, ул хөрмәт етерлек түгел, тип уйлайым. Нимәлә сағыла һуң был? Һуңғы ваҡытта, һуғыш ветерандарына фатир бирергә кәрәк, тип күп һөйләнделәр. Ҡайһы бер ветерандарға был бәхет тәтене, әммә бәғзе берәүҙәргә ул тәтемәне. Урындағы власть әһелдәре ул ветерандарҙың фатир буйынса һорауын кисектереү өсөн төрлө һылтау эҙләүҙе дауам итә. Йәнәһе, уларҙың йәшәгән йорто бынамын тигән, йәнәһе, улар мохтажлыҡ кисермәгән балалары ҡарамағында ла йәшәй ала, һәм башҡа һылтауҙар уйлап сығарыла. Законды урап үтеүселәре лә осрап тора.

Мин һуғыштан һуң Германияла ике йыл йәшәнем. Ошо еңелгән, бөлгән илдә ул ваҡытта йәшәү кимәле бик шәптән түгел ине, әлбиттә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һуғышта ҡатнашыусы ветерандары ул ваҡытта уҡ юғары пенсия ала ине. Америка, Европа илдәрендә лә шулай булды. Ә беҙҙәге бик күп һуғыш ветерандары бәләкәй генә пенсияға, мохтажлыҡта йәшәп, бер енеллек күрмәйенсә үлеп киттеләр.

Көндәлек тормошта ла борсоған мәсьәләләр етерлек бөгөн. Дарыу мәсьәләһен генә алайыҡ. Элек беҙ дарыуҙы бушлай ала инек. Хәҙер ай һайын күпмелер аҡса биргән булалар. Әммә дарыуҙар хаҡы менән сағыштырһаң, был аҡса мыҫҡыл кеүек тойола. Хәҙер дарыуҙар шул тиклем ҡиммәт, меңдәрсә һум тора. Пенсионер бәләкәй генә пенсияһына уны һатып ала алмай. Шифаханаларға юлламалар буйынса ла аңлайышһыҙ, алдан уҡ ветеранға юллама бирмәүгә ҡоролған схемалар менән осрашырға тура килә. Бөтәһен дә ҡатмарлаштыралар.

Эйе, ябай халыҡ ветерандарҙы хөрмәт итә. Мәктәптәргә, вуздарға саҡыралар. Ләкин үҙҙәрен халыҡтан өҫтөн ҡуйыусылар ҙа етерлек. Чиновниктарҙы әйтәм. Улар беҙҙе байрамда ғына хәтергә ала, ә башҡа ваҡыттарҙа бәгзеләренең янына барып етеп тә, уларҙың ҡабул итеүенә өлгәшеп тә булмай.

**Марат Муллағәлләмов:** Айырым етешһеҙлектәр менән осрашырға тура килһә лә, Бөйөк Ватан һуғышы ветрандарын дәүләт барыбер ҙә хәстәрләргә тырыша тырышыуға. Әммә ошо һуғышҡа туранан-тура бәйләнеше булған икенсе ҙур төркөм ололарыбыҙ ҙа бар бит әле. Ул да булһа, һуғыш осоро балалары. Бала саҡтары, үҫмерлек осоро ошо дәһшәтле һуғышҡа тап килгән быуын. Улар ярҙамы менән тыл фронтты тәьмин итте. Улар балалыҡтарын ошо ауыр хеҙмәткә бирҙе. Ошо быуын ярҙамы менән һуғыш арҡаһында емерелгән дәүләт ҡабаттан тергеҙелде, сиҙәмдәр күтәрелде, космос үҙләштерелде, дәүләттең именлек ҡалҡаны эшләнде. Был быуын вәкилдәре лә бөгөн арыу ғына йәшкә етте. Уларҙы ла оноторға ярамай. Әммә уларға мөнәсәбәт икенсе. Улар бик бәләкәй генә пенсия ала. Ҡалала йәшәгәндәре совет заманында алған фатирҙары өсөн ҙур коммуналь сығымдар түләй. Уҡытыусы, табип булғандарының ғына түгел, хатта заводта эшләгәндәрҙең дә бәләкәй генә пенсиялары ул сығымдарҙы ҡаплай алмай. Ауылдарҙа ла хәлдәр яҡшы, тип әйтмәҫ инем. Ә бит оло кешегә дарыуы, медицина хәстәре лә кәрәк. Бер нисә йыл элек 122-се закон донъя күргәйне. Бөтөнләй уйланылмаған аҙым булды был. Льготаларҙы тиндәргә әйләндереп, кемгә яҡшы эшләне икән дәүләт? Сөнки ул тиндәр дарыуға ла, юлға ла, башҡа нәмәгә лә етмәҫе көн кеүек асыҡ ине. Һис шикһеҙ, үҙгәртергә кәрәк был законды.

**▸ Йәштәргә, киләсәк быуынға әйтер һүҙҙәрегеҙ барҙыр?**

**Рамаҙан Ҡотошов:** Беҙҙең быуын коллективлаштырыуҙы ла, индустриялаштырыуҙы ла, репрессияларҙы ла күрҙе. Бик ауыр замандар ине. Ашау наҡыҫ, кейем юҡ. Әҙерәк аҡса эшләһәң дә, ул икмәк алырға ла етмәй. Хәҙер, Аллаға шөкөр, бөтә нәмә лә бар, бик һәйбәт йәшәйбеҙ. Әммә алға барыуҙы әҙәм балаһының үҙ яманлығы тотҡарлай бит. Әҙәм үҙ башына үҙе бәләләр эҙләй. Эскелек, наркотик тигәндәре шул бәләләрҙең иң яуызы инде. Әҙәмдәр үҙ-үҙенә яманлыҡ ҡылыуҙың хәтәрен аңлаһын ине. Кешелек килешеү һәм теләктәшлек юлы тапһын ине. Булып үткән һуғыштарҙың һабаҡтарын онотмаһындар, яңы һуғыштың шаһиттары булырға яҙмаһын ине.

**Марат Муллағәлләмов:** Бер мәл еңеүҙе американдар менән инглиздәр килтергән, тип ауыҙ тултырып һөйләй башлағайнылар. Әле булһа ла ҡайһы берәүҙәр, һуғышты Гитлер түгел, Сталин башлаған, тигән ялған таратып маташа. Бар ошо бысраҡлыҡ йәштәрҙең аңдарын бутап, уларҙы кирегә, яңылыш юлдан алып китмәһә ине. Эйе, илһөйәрлек бөгөн һүҙҙә генә тороп ҡалып бара. Телевидение аша ла, интернет, төрлө баҫмалар аша ла халыҡтың башын кәрәкмәгән сүп-сар менән тултыралар. "Йондоҙҙарҙың" шәхси тормошо, кемгә кейәүгә сығып, кемдән айырылғанынан башҡа бер мәғлүмәт алырмын тимә уларҙан. Ундай мәғлүмәт ярҙамында ниндәй әхлаҡ, илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләнһен, ти? Үткәндәрҙе күп сәйнәргә була, ләкин хаталары булыуына ҡарамаҫтан, ҙур Еңеүгә өлгәшкән, СССР кеүек ҙур дәүләт төҙөгән, фәндә ҡаҙаныштар яулаған, беренсе булып Йыһанды байҡаған быуынды онотмаһын, балаһын ине йәш быуын, улар иҫән саҡта тейешле хөрмәт күрһәтһендәр ине. Көнбайыш идеологтарының аҡсаһына нәшер ителгән китаптарҙы уҡып, ата-олаталары хаҡында насар уйҙа булмаһындар ине...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Оло быуындың борсолоуҙары урынлы. Улар телгә алған һабаҡтар ҙа һәр кемдең күңеленә инеп, һиҫкәндерерлек. Өлкән быуын, айырым кешеләрҙең амбициялары бөгөн дә донъяны 73 йыл элек башланып киткән һуғыш хәләнә килтермәһә ине, ти икән, был беҙҙе, йәш быуынды ла, һиҙгер булырға мәжбүр итергә тейеш.**

**Азамат САЛАУАТОВ яҙып алды.**

ХӘТЕРКИТАП

# УРМАНДАРҘА - ҠАСҠЫНДАР

**Мин һуғыш йылдары балаһы. Хәҙер миңә 84 йәш. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Ауырғазы балалар йортонда тәрбиәләндем. Үҙемдең бала саҡ хәтирәләремә араһында һуғышҡа бәйлеләре лә уйылып ҡалған. Был турала яҙмайҙар ҙа, һөйләмәйҙәр ҙә, шулай ҙа ул осорҙа тылда дезертирҙар ҙа күп була торғайны бит.**

Бер ваҡыт ауылда халыҡты йыйҙылар ҙа, төрмәнән бер дезертир ҡасҡан, шуны тоторға кәрәк, тинеләр. Төрмә урман буйында ғына. Урманды һөҙөргә сыҡҡан ололарға беҙ ҙә эйәрҙек. Шаулашып бара торғас, малайҙар: "Бында килегеҙ!" - тип ҡысҡырып ебәрҙе. Ҡаскын ял итергә ятҡан булған икән. Тороп йүгергән ыңғайға, тотоп алғандар.

Бындай ҡасҡындар ауылдың малына ла тейә торғайны. Бер апайҙың бызауы юғалған. Бер нисә көн буйы эҙләп, кул буйындағы урманға еткән. "Манька!" тип ҡысҡырып бара торғас, бызауы тауышланып яуап биргән. Барып етһә, бызауы оҙон арҡан менән бәйләнеп, соҡор буйында тора, ти. Арҡанды нисек тә ысҡындырып, апай юғалған малын алып ҡайтҡан. Нисек ҡурҡманың, тип һорайбыҙ аптырап. "Нисә көн буйына эҙләп, барып тапҡас, нисек ҡалдырып китәйем?" - тип яуапланы ул. Әлбиттә, һуғыш йылында быҙау ҙа ҙур байлыҡ ине.

Был ваҡиға иһә минең үҙем менән булды. 1941 йылдың декабрь айында Башҡорт атлылар дивизияһын төҙөргә булғас, халыҡтан, колхоздарҙан аттар йыйҙылар. Балалар йортоноң өс аты бар ине. Береһен егеп, көнө буйы мискә менән һыу ташыйҙар ине. Икәүһе менән алыҫтағы Жалановка ауылы янындағы урмандан ҡышҡылыҡҡа утын әҙерләп ташыйҙар. Дивизияға ике атыбыҙҙы алып киткәс, утын ташырға ат ҡалманы, шуға ла утынды яҡындағы урмандан бирә башланылар. Беҙ, ҡыҙҙарҙың, үҙ хәсрәте. Элек йыраҡтағы урманға утын әҙерләргә киткән малайҙар янына еләк, ҡурай еләге йыйырға йөрөй торғайныҡ. Атҡа һауыт-һабалар, бер көн ашарлыҡ аҙыҡ тейәп, одеялдар алып, үҙебеҙ ат артынан эйәреп китәбеҙ. Урманда еләк йыйып, ҡыуыш ҡороп, усаҡ яғып, йырлап-бейеп, күңел асып, икенсе көнөнә генә ҡайта торғайныҡ. Хәҙер уйлап бәхет тә тәтемәй.

Директор, завуч, завхоз булып эшләгән ағайҙар һуғышҡа киттеләр. Уларҙы оҙатҡанда йортобоҙҙоң күтәрмәһендә тәгәрәшеп илап ҡалғаныбыҙҙы һис онотмайым. Уларҙың урынына Өфөнән Ғазиев Шәрифйән тигән ағай эшкә килде. Ул оло йәштә ине, Граждандар һуғышы йылдарында комиссар булып хеҙмәт иткән. Тағы бер матур сифаты хәтерҙә ҡалған - балаларҙы бик ярата ине. Беҙ ҙә уға тиҙ эйәләштек. Төндәрен шәм тотоп, бүлмәнән-бүлмәгә беҙҙе ҡарап йөрөй торғайны. Көндөҙ фотоларын күрһәтеп, һуғышта булған саҡтарын һөйләй. Жалановка урманына еләккә барайыҡ әле, тип һорап, ағайҙың тенкәһенә тейеп бөтә торғайныҡ. Бер көндө риза булды был, бер тәрбиәсене лә эйәртеп ебәрҙе. Беҙ шатланып, бер көнлөк икмәгебеҙҙе (бер оло ғына телем) тотоп, еләккә сығып киттек. Төштән һуң ауылға барып еттек, ҡарауылсы бабайҙың өйөндә ҡундыҡ. Икенсе көндө беҙгә бабайҙың ейәне менән ейәнсәре лә эйәрҙе. Уларҙың аталары һуғышта йөрөй, әсәләре колхоз эшенән бушамай икән. Ейәнсәренә - 13-14, ейәненә 9-10 йәштәр тирәһе бар. Ҡыҙыҡай ҡулына бик матур зәңгәр сәйнүк тотоп алды.

Еләк бик уңмағайны ул йылды. Шулай ҙа бер аҙ йыйҙыҡ. Малай менән ҡыҙ беҙгә ҡушылмай, ситтә генә йөрөнөләр. Төшкә табан тар ғына һукмаҡҡа килеп сыҡтыҡ та, аяҡтарыбыҙҙы һуҙып, шунда ултырҙыҡ. Һөйләшә-һөйләшә еләк ашап ултырабыҙ. Бер ваҡыт дөп-дөп атлап килгән тауыш ишетелде. Сәсе еткән, һаҡал-мыйыҡ баҫҡан, күҙҙәре генә ялтырап торған кеше һукмаҡтан атлап килә. Йәйҙең эҫе селләһендә өҫтөнә туҙған фуфайка кейгән. Һукмаҡ аша һуҙып ултырған аяҡтарыбыҙҙы тартып алырға ла өлгөрмәнек. Ул беҙҙең аяҡтарыбыҙҙы аша атлап, үтеп китте. Беҙ уның артынан ҡурҡып ҡарап ҡалдыҡ. Ул бер аҙ барғас, теге ҡыҙ менән малай тауышы сыҡҡан яҡҡа боролоп инеп китте. Беҙ еңел тын алып, һөйләшә генә башлағайныҡ, ағастар араһынан малайҙың йүгереп сыҡҡанын күрҙек. Ул ҡысҡыра-ҡысҡыра беҙгә табан килә башланы. Уны күреү менән урындарыбыҙҙан торҙоҡ та, һукмаҡ буйлап саптыҡ. Иң алдан - апайыбыҙ, уның артынан - ҡыҙҙар, мин, араларында иң бәләкәйе, арттан йүгерәм. Йүгерә торғас, ялтырап, урман аушыҡ күренде, беҙ урман ситенә килеп сыҡтыҡ. Теге малай ҙа беҙҙең янға килеп йығылды.

Байтаҡ ултырҙыҡ, йоҡлаштырып та алдыҡ. Шунан ғына теге ҡыҙ күренде. Шул тиклем түгелеп илай ине, күлдәге йыртылып төшкән, ҡулындағы матур сәйнүге юҡ. Ул беҙҙең янға килеп торманы, тура ауылдарына китте. Малай ҙа апаһының артынан йүгерҙе. Беҙ үҙ юлыбыҙға йүнәлдек. Ҡайтып еткәнсе апайыбыҙ теге ҡыҙҙы йәлләп килде. Беҙ, балалар, был хәлдә үҙебеҙсә аңланыҡ. Илауын сәйнүген юғалтыуға ғәрләнарҙыҡ. Ҡайтҡас, быныҡ өсөн ҡартатаһы әрләй инде, тибеҙ. Беҙҙең шулай һөйләнеп килгәнде ишеткән тәрбиәсебеҙ был хәл тураһында бер кемгә лә һөйләмәҫкә ҡушты. Юғиһә, беҙҙе башҡа урманға ебәрмәйәсәктәр ине.

Ә урман ул ваҡытта беҙҙең төп туйындырыусыбыҙ булды. Ҡаҡы, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, кәзә һаҡалы, ҡуян тубыгы, һарына ашап, тамаҡтарыбыҙҙы бөтәйтә инек. Шуға ла был ваҡиға тураһында бер кемгә лә һөйләмәнек. Етмеш йыл үткәс кенә тәүгә батырсылыҡ иттем. Һуғыштың беҙҙең быуындың хәтерендә һаҡланған бына ошондай яғы ла булды. Бындай яуызлыҡ һәм вәхшилектәрҙе йәштәргә күрергә яҙмаһын. Ә урманға беҙ күп йөрөнөк. Ҡумаҡ булғас, ҡурҡмай ҙа инек. Унда ташландыҡ ҡыуыш, яғылған усаҡ урындарында балта, бысаҡ кеүек әйберҙәрҙе лә табып алып ҡайта инек.

**Рәүфә ҒАТАУОВА.**
**Миәкә районы Илсеғол ауылы.**

**✓ *Әллә ул мыйыҡлы кеше ысынлап та бөтәһенең дә атаһы булғанмы? Ҡайтышлай Мәүлиҙәләргә инеп сыҡҡайным, бәс, уның атаһы ҡояштай балҡып йөрөй, һис тә ҡайғырмағайны Сталин бабай үлгәнгә. Тағы аптыраным...***




* * *

...Өлкәндәр Сталинды йыш телгә алалар. Ә мин беләм уны, Сталин бабайҙы. Ҡашағаһында атайымдың кәртешкәһе торған тәҙрәгә ҡаршы стенала уның һүрәте элен-гәйне. Гелән бер-береһенә ҡарашып торҙолар шулай. Ә мин уларҙың икеһенә сәңгелдәктә ҡарап яттым. Атайымдың кәртешкәһенә бөтәһе лә төртөп күрһәтеп, көн дә әйтеп торҙолар, тыуа-тыуғаным бирле, ә мыйыҡлы кеше менән таныштырыусы булманысы. Таҫтамал менән ҡаймалап, түргә ҡуйғандар һүрәтен, моғайын, яҡын кешебеҙҙер?

Аң белгәс, ҡартәсәйемдән һораным:

- Кем ул ?

- Сталин бабай! - тине ҡартәсәйем.

- Һинең атайыңмы, әллә Зөлхизә өләсәйемдекеме?

- Бөтәбеҙҙең дә атаһы ул, - тине лә ҡартәсәйем мине күтәреп һикегә ултыртты, үҙе ихатаға сығып китте. Мыйыҡлы кешегә текләп ултыра торғас, йоҡлап киткәнмен...

Шуларҙы иҫләнем дә тағы өйҙәге хәбәргә ҡолағымды ҡарпайттым:

- Лавкаға барғайным, шунда өс-дүрт фронтовик, әллә әсе балды күберәк һемергәндәр, ҡыҙып китеп, эй гәпләшәләр, Сталинды әрләйҙәр... Ҡурҡмайынса! Һуғыш булырын белә тороп, армияны әҙерләмәгән, тиҙәр. Ҡырҡ беренселә киткәндәрҙе, салғы менән үлән сапҡан ише, тотош ҡырып һалған инде дошман, уныһы беҙгә лә мәғлүм... - Ҡартәсәйем тымғас, атайым дауам итте:

- Һеҙгә бында, төпкөл ауылда, күп нәмә ҡараңғы инде ул. Мин унда, армияла, төрлө милләт араһында күпте аңланым. Сит ил моряктары менән дә фекер алыша торғайныҡ, мин бит сухопутный моряк булдым, ҡырҙан килгән судноларҙан йөк бушаттыҡ, үҙебеҙҙең сырсаны уларға тейәнек... Сталиндың хаталары етерлек, был һуғыш ул хәтлем ҡанлы булмаҫ ине, әгәр юлбашсы алдан күрһә.

- Бер үҙе нисек барыһын уйлап бөтһөн, ярандары ҡайҙа ҡараған?

- Ярандары? Улар ҡурҡып, ярамһаҡланып өндәшмәгән, ә тура һүҙлеләренең башы төрмәлә серегән. Утыҙ етенсе йылдарҙа иң шәп командирҙарҙы атып бөтөргәндәр.

- Сталинһыҙ фашисты еңер инекме, һин шуны бел! - Ҡартәсәйем инанып әйтте быны, атайым да һүҙ көрәштермәне, килеште, ахырыһы. Тағы баяғыса ҡабатланы:

- Һеҙгә ни, төпкөл ауылда...

Ҡартәсәйем уға һүҙен осларға ирек бирмәне:

- Ниткән хәбәр ул, "төпкөл ауылда" ти ҙә торасы. Үҙең ҡайҙанһың, ә? Беҙ бында, тылда, күргәнде, асыуым да килмәгәйе, бәғзе һалдат та күрмәгәндер әле, уф, Аллам! Көфөр булмағайым... Бер ус бойҙай өсөн, ана, Гөлбикә күршене ер аяғы ер башына - ҡатырға һөрҙөләр. Ире фронтта булып ҡалды. Ҡайтманы ул, ҡара ҡағыҙы ла килмәне үҙенең. Ғәрләнгәндер Гөлбикәһенең хәленән, башын сит яҡҡа олаҡтырғандыр һуғыштан һуң, тип фараз итеүселәр ҙә булды. Бахыр ғына, Гөлбикә ауырлы ине, ташмайып бөткән көйөнә ҡулдарын ҡайырып алып киттеләр. Үҙең дә күреп торҙоң дабаһа! Иҫ кергән сағың...

- Эйе, каторгаға... Ҡырҡ икенсе йылда, - тине лә атайым ҡапыл һорап ҡуйҙы:- Ул ҡайҙа? - Күҙе менән кемделер эҙләне үҙе. Кемде? Бында тик үҙебеҙ генә.

- Ышаныслы урында, - тине ҡартәсәйем. - Ярар, һорау алма минән.

- Әсәй, бөттө хәҙер һорау алыуҙар, шымсылыҡ, эҙәрләүҙәр. Ул - юҡ!

Тағы Сталин тураһында икән һүҙ, атайым теге һүрәтте эҙләгән, китель кейгән мыйыҡлы кешене. Уны ҡартәсәйем, ҡара кәшмир яулығына төрөп, һандығына һалып ҡуйҙы - быйыл март айында, 5 мартта, Сталин вафат булғас. Ул көндө ҡартәсәйем ныҡ ҡайғырҙы. Мине эйәртеп колхоз кәнсәләре янындағы митингыға алып барҙы. Бар әҙәм илай ине шикелле. Әллә ул мыйыҡлы кеше ысынлап та бөтәһенең дә атаһы булғанмы? Ҡайтышлай Мәүлиҙәләргә инеп сыҡҡайным (бер урамда йәшәйбеҙ), бәс, уның атаһы ҡояштай балҡып йөрөй, һис тә ҡайғырмағайны Сталин бабай үлгәнгә. Тағы аптыраным...

Ә теге үҙ башынан үткән фажиғәле хәлде миңә Гөлбикә апай үҙе һөйләгәйне, атайым ҡайтырҙан ике-өс көн алда ғына. Күрше йәшәгәс, кергеләп йөрөйөм уларға. Ҡартәсәйем уны бик өнәп бөтмәй әллә, йомош-фәләнгә мине индерә лә ебәрә. Шул бер йомош ине инде гелән: уның ҡыл иләге бар, ә беҙ ошоғаса йүкә иләк менән көн күрҙек. Ошоғаса, тим, сөнки атайым армиянан бер түгел, ике ҡыл иләк алып ҡайтты, мохтажлыҡты белгәс ни.

Ҡыл иләккә тип һуңғы ингәнемдә, Гөлбикә апай оҙон көйгә йырлап ултыра ине. Тупһала туҡтап тыңлап торҙом, әй, моңло икән тауышы, һағышлы. Шул юлы һөйләне күргән ғазаптарын.

...Төнө буйы ырҙын табағында ҡул молотилкаһында арманһыҙ булып эшләп ҡайтып, итек ҡунысына бөҫкә генә итеп тултырған бойҙайын бушатып ҡына торғанда, хәрби кейемдәге ике ир килеп инә лә шарылдатып ҡысҡыртып алып сығып китә уны. Әсәһе Миңлебаныу инәй был күренештән ҡото осоп йығылып ятып ҡала...

Гөлбикә апай, хилаф эш ҡылғанын аңлаһа ла, ул ҡәҙәрем дә ҡаты яза бирерҙәр, тип уйламаған шул. Халыҡ дошманы! Абау... Бынау бәләкәй генә башым менән мин дә аңлайымсы, ошо наҙан ғына, йыуаш бер апай ҡалайтып халыҡҡа, тимәк, илгә, зыян ҡыла алһын, ти, ул? Бойҙайҙы ла асыҡҡанға урлағандыр, йөклө булған бит.

Артабан күҙ алдымда тағы хәтәрерәк, ҡот осҡос хәлдәр пәйҙә була.

...Икһеҙ-сикһеҙ даръяла баржа тигән ҙур һал йөҙөп бара. Көн йөҙә, төн йөҙә... Магадан лагерына табан йөҙә. Ҡайҙа баҡма - офоҡ менән тоташҡан һыу. Күрәнленән дә киң һыуҙар бар икән?

Баржаның ҡаҡ иҙәнендә ултырған йөклө ҡатындың башы ҡапыл һеңгәҙәтә килтереп һуҡҡан яҙмыш күҫәгенән тубал булған, уйҙары инеп-сығып йөрөй шунда... Тик башы түгел, эсе өҙөп-өҙөп ауырта, биле әсетеп һыҙа. Ул һыҙланыуға сыҙар ғына әмәле лә юҡ бисараның, әммә өн сығарырға ҡурҡа. Кисә хәсрәтенә түҙмәй һыңҡылдап илағанын ишетте лә, бер һаҡсы тимер сыбыҡ менән ҡайыҙлаңы арҡаһын. Әле арҡа әрнеүе һиҙелмәй ҙә, сөнки эсендәге киҫкен ауыртыныу унлата көслөрәк! "Ай, Аллам!" Барыбер ҡысҡырмай түҙә алманы. Туҡмаһындар, типкесләһендәр - уға барыбер...

- Әллә балаларға итә? - тип һөйләшә һаҡсылар.

- Ахырыһы. - Шунан ҡатынды, башҡа уның ише тотҡондар араһынан йолҡоп алып, һөйрәкләп, бер мөйөшкә илтеп һалдылар. Күпмелер ваҡыттан һуң килеп ҡаранылар:

- Кәнтәй, берҙе лә түгел, икәүҙе тапҡан.

Ҡатын шул тирәлә ятҡан тоҡмо-нимәме ярпыларына төргән сабыйҙарын күкрәгенә ҡыҫты.

- Ҡайҙа, бир әле бында, күрәйек! - Һаҡсылар төргәктәрҙе тартып алып, иҙәнгә һалып тағатты. - Малайҙар. Береһе үлгән, икенсеһе тере һымаҡ? Мә!- Тере сабыйын ҡатынға ырғыттылар, саҡ тотоп ҡалды. Икенсеһенең мәйетен сыр яланғас килеш даръяға ташланылар. Балыҡ ҙурлыҡ ҡына аҡ кәүҙә баржа ҡубарған тулҡын күбеге аҫтында юҡ булды. Тетрәнеүҙән арыныр ға ҡатынға ҡулындағы сабыйҙың тәҙелдәүе ярҙам итә. Игеҙәк булғандар икән, әйтәм, эсен айҡайҙар ине, ҡыбырҙашып. Етлекмәй тыуҙылар, ете ай ҙа тулмаған... Бынының йәшәтергә ине, тере бит. Сабыйына имсәк ҡаптырырға итә, юҡ, алмай имсәкте, хәлһеҙ. Хәйер, һөт төшмәгән түшенә...

Арыу-йонсоуҙары сиктән ашҡайны, йоҡлап киткән. Төш күрҙе: имеш, Гөлбикә - йәш, матур сағы - Күрәнлелә һыу инә, ә ап-аҡҡына ике балыҡ уның тирәһендә уйнап йөҙә. Ҡурҡмайҙар ҙа унан, тотоп алыр тип белмәйҙәрме? Балыҡтарға ҡулын һуҙҙы... һәм уянып китте. Ҡулындағы бәпесе тубығына тәгәрәп төшкән, күҙҙәре йомоҡ... Йоҡлаймы? Тын алмай һымаҡ? Әсә сабыйының кескенә кәүҙәһен танауына терәп тигәндәй тыңланы: һулышы бармы, юҡмы? Юҡ... Үлгән...

Был сабыйҙы ла һаҡсылар даръяға ырғытты. Үҙенән саҡ ҡына алдан киткән игеҙәк туғаны артынан ул да аҡ балыҡ булып сөңгөлгә сумды...

Ошо хәтлем аянысло хәлдәрҙе миңә, бала-сағаға, һөйләне Гөлбикә апай. Күңелен кемгә бушатырға белмәгән мәле булғандыр, күрәһең. Япа-яңғыҙ шул ул. Әсәһе анау саҡтағы тетрәнеүенән мантый алмаған, йөрәк өйәнәгенән вафат булған.

Хайрандар булып ҡайттым да әлеге ҡыл иләкте көтөп көтөк булған ҡартәсәйем менән әсәйемә һөйләргә тотондом теге тарихты. "Беләбеҙ, кәрәкмәй, зинһар, һөйләмә", - тиҙәр. Ә мин түҙмәйем, барыбер үҙемсә теҙә барам. Шул тиклем тәьҫоратты тышҡа сығармай нисек сыҙайым, ти?!

Аҡ балыҡ булып даръяла ҡалған сабыйҙар тураһында һөйләнем дә, күҙемә йәш килеп, туҡтап ҡалдым:

-Иләгеҙ оноғоҙҙо, шул бер һелкәүес он өсөн...

- Сейәнкә бит, үтә лә ҡәҙерле аҡ он, - ти ҡартәсәйем. - Йә, артабан ни булған?

- Әллә нисәмә һөйләгәндер инде ул хәбәрҙәрҙе Гөлбикә апай һеҙгә. Әйтәм, ҡартәсәй, үҙең бер ҙә кермәйһең йомошҡа, йөрәгендә өшөткөң килмәй икән. Ә минеке өшөһә лә ярай-мы?

- Һинең кеүек итеп тасуирлап бәйән итеүсе юҡ, белгең килһә.

- Һы, йүкә шына ҡағалар... Башта шуны әйтегеҙ әле: кем ошаҡлаған теге юлы Гөлбикә апайҙы?

- Ауылдаштарҙың эше түгелдер,- ти һалды ҡартәсәйем. - Ул осорҙа, сәсеү йә ураҡ мәле етһә, НКВД кешеләре, тағы әллә кемдәр килеп етә һала ине - тирә-яҡ ауылдарҙың игене лә беҙҙең ырҙын табағына килтереп эшкәртелә торғайны, шуғалыр. Тикшереп, аңдып ҡына йөрөнөләр... Йә һөйлә, тим, аҙағына сыҡ инде хәбәреңдең, бер башлағас!

- Аҙағы ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та түгел. Ултырған төрмәлә... Көн дә һаҡ аҫтында быяла заводы өсөн сеймал - һүнгән вулкан итәгендәге көлдө тейәтергә йөрөткәндәр, көн дә кәбеҫтә һурпаһы эсергәндәр. Тағы?.. Күрше барактағылар алтын йыуыуҙа эшләнеләр, уларға иң ауыры тейҙе, иҫән ҡайтҡандары һирәктер, тине. Гөлбикә апайҙан икенсе юлы шуларҙы һөйләтәм әле: нимәһе ауыр булған икән, алтынды бер тотоп ҡарауың ни торалыр ҙаһа? Бик күп тотҡондар штрафбатҡа оҙатылды, иҫән ҡалмаҫтарын белеп торһалар ҙа, фронтҡа китеүҙәренә һөйөндөләр, тине тағы... Ә үҙе, беләһегеҙҙер, һуғыштан һуң, ураҡ мәле ине, ти, әйләнеп ҡайтҡан ауылға. Лагерға немецтарҙа әсирҙә булғандарҙы килтереп тултырғандар икән...

* * *

...Ҡасан ғына, ҡайҙа ғына осрашмаһындар, гәптәрендә "һуғыш" тигән һүҙ ҡалҡып сыҡмай ҡалмай - был ағайҙарҙың тормошо, гүйә, ике осорға бүленгән: һуғышҡа тиклем һәм һуғыштан һуң. Мин ул ике осорҙо ике яр, арьяҡ һәм бирьяҡ итеп күҙаллайым, ә уртала, ҡайнап торған ут, ҡан, күҙ йәше урғылып аҡҡан тарафта - һуғыш үҙе. Моғайын, тамуҡ шундайыраҡ булалыр? Үҙем күрмәгән һуғышты уйламай, пәйҙәләп ҡарамай булдыра алмайым, сөнки мин белгән кешеләрҙең күбеһе уны көн дә иҫенә төшөрә. Зөлхизә өләсәйемдең уландарын, ҡурайсы олатайымды йотҡан ул тамуҡ. Әсәйемде ятатҡан Барый ағайҙы һәләк иткән, күрше Ғәҙилә инәйҙе хыялыйландырған. Мансур ағайҙың ҡулын өҙөп алып ҡалған... Клуб янындағы обелискыға һуғышта башын һалғандарҙың исемлеге яҙылған, уҡып, осона сығып етмәҫлек. Бер Мәүлетҡоловтар ғына ундан ашыу, буғай. Нәҙерғоловтар - бишәү, икәүһе минең бабайымдар: Рәхмәтулла менән Зәйнулла. Эйе, бөтә илдең, бар халыҡтың яҙмышын икегә айырып аға ул ҡанлы йылға. Китапты асһаң - фронт шиғырҙары, радионы ебәрһәң - фронт йырҙары, ағайҙарҙы тыңлаһаң - фронт хәтирәләре. Беҙ - һуғыштан һуң тыуған балалар, ул дәһшәтле осорҙо күргәндәй итеп кисерәбеҙ. Сөнки кесе йыһанда (әсә ҡарынында) сағыбыҙҙа уҡ шул тиңһеҙ юғалтыуҙар хаҡында ишетеп, йөрәк ҡаныбыҙҙы һуғарҙыҡ, шул мәңге баҫылмаҫ әрнеүҙәр күҙҙәренә, һүҙҙәренә һеңешкән кешеләр араһында үҫтек.

Бөйөк Еңеүҙең 15 йыллығын байрам итәсәкбеҙ. Толпарлы ғына түгел, барлыҡ Советтар Союзы, совет һалдаттары фашистарҙан азат иткән Европа илдәре тантанаға әҙерләнә. Етеп тә килә ул көн - 9 май. Тышта яҙ хөкөм һөрә, апрель елдәре өрә. Ҡояш бөтә йылыһын, яҡтыһын, сәмен ҡышты һындырыуға еккән, ҡайнар нурҙарын ергә көлтәләп ҡоя ғына. Ҡар бүҫкә-

✓ *Мин дә Сәмиғуллиндың шинель салғыйына тағылып ҡайтам, ә ул бер ҡыҙын етәкләй, бәләкәсерәген күтәреп ала. Мине атайым тик бер генә тапҡыр күтәрҙе, армиянан ҡайтҡас... Шуға күрә уның хаҡында иншаға яҙыр һүҙем дә юҡ.*



рә, күҙгә күренеп йоҡара, емшей бара.

Кисә башҡорт теле уҡытыусыһы һуғыш темаһына инша яҙырға ҡушты. Конкурс була, тине, уйларға бер аҙна ваҡыт бирҙе. Нимә яҙырға икән, нисек? Әллә бабайымдарҙы яҙайыммы? Дәфтәр тултырып теҙер һүҙем бар һымаҡ...

Кәңәшләшергә, тип, Бүреһуҡҡан олатайға киттем. Мин уны ихластан ҡан олатайымдай күрәм. Гел ҡатындар йәшәгән беҙҙең өйҙөң иң тоғро ярҙамсыһы лаһа. "Олатай ниндәй була?" тигән темаға инша яҙырға ҡушһалар, мин тик уның хаҡында яҙыр инем. Ә атай хаҡында ҡушһалар? Моғайын, Сәмиғуллин иҫемә төшөр ине иң беренсе. Уның ике ҡыҙына күҙем ҡыҙа минең... Атайҙары сыйырсыҡ ояһы эшләп бирә, буран сыҡһа, уҡыуҙан ҡаршы барып ала, мәктәп алыҫ беҙҙең, ауылдың арғы осонда. Бер тыҡрыҡ аша ғына йәшәгәс, мин дә Сәмиғуллиндың шинель салғыйына тағылып ҡайтам, ә ул бер ҡыҙын, минән ике синыф алда уҡығанын, етәкләй, бәләкәсерәген күтәреп ала. Мине атайым тик бер генә тапҡыр күтәрҙе, армиянан ҡайтҡас... Шуға күрә уның хаҡында иншаға яҙыр һүҙем дә юҡ. Ә өрләк-атай менән һөйләшеүемде, уны һағынып һығылып илауҙарымды яҙһам, диуана булған, тиерҙәр...

Бүреһуҡҡан олатай өйҙә күҙлек кейеп гәзит уҡып ултыра ине. Мәктәптә уҡыу эләкмәгән уға, үҙ алдына өйрәнгән.

- Дары еҫкәп ҡарамаған кеше яҙған быны! - тип гәзитте һелкеп-һелкеп алды ул, мине күргәс. - Нурия, мә, ҡысҡырып уҡы әле, күҙем әллә яңылыш күрә?

Уҡып сыҡтым. Мәҡәләлә фронттағы бер хәл яҙылған. Күҙ асҡыһыҙ ҡышҡы буранда, бер төркөм совет һалдаттары блиндажда бутҡа ашап ултырғанда, немец һалдаты аҙашып килеп керә. Командир быны ашатырға һәм штабҡа алып барып тапшырырға бойора. Беҙҙең бер һалдат "тел"де штабҡа алып китә. Юлда, приказды боҙоп, теге немецты ата ла үлтерә. Блиндажға ҡайтҡас, немец ҡасып китергә итте, шуға аттым, тип аңлата. Командирына дөрөҫөн һөйләй, улар икеһе бер төбәктән, яҡын дуҫтар икән. Ә командир приказды боҙған өсөн дуҫын ҡулға ала һәм штабҡа оҙаттыра, тик немецты үлтергән һалдатҡа әллә ни ҡаты яза бирмәйҙәр. Яҡташтар һуғыштан икеһе лә иҫән ҡайта, әммә шул хәлде онотмайҙар, бер-береһе менән ҡатышмайҙар.

- Ниңә, олатай, шыма ғына яҙылған даһа, - тигән булдым.

- Шыма, бик тә шыма! Әммә уныһы нисшут, любой дүрәк (олатайҙың, йәне көйһә, ике-өс урыҫ һүҙен туҡтауһыҙ ҡушып һөйләй торған ғәҙәте бар) яҙа хәҙер һуғыш тураһында. Уйҙырма яҙыуҙары нервыға тейә, башҡаһы нисшут, вәт тәк. Һин йәш бала, һуғыш төшөңә лә инмәгән, барыбер, аҡылың булһа, ышанмаҫ инең мынау гәзиттәгенә. Әллә ышандыңмы?

- Әллә...

- Һин бына күҙ алдыңа килтер. Һалдат икәнһең, ти. Ҡулында автомат. Иленә баҫып кергән фашист, донъялағы иң хас дошманың, ҡапыл ҡаршыңа килеп баҫа. Нишләр инең? Тиҙ яуап бир!

- Атып йығыр инем!

- Ә ниңә уға бутҡа ашатмайһың?

- Ул бит ҡунаҡ түгел, дошман. Минең ике бабайымды үлтергән.

- Теге командир урынында нишләр инең?

- Ә, бәлки, ул "тел" ҡиммәтле булғандыр, олатай, берәй немец генералы?

- Генерал буранда бер үҙе йөрөмәй, ул йылыла, охран менән, сигәрит тартып, шнапс тигән араҡы йотоп ултыра. Был бахыр ябай нимес һалдаты булған инде. Йәл, эйе, ул да әҙәм балаһы, әммә һуғыштың үҙ ҡануны: йә һин дошманды үлтерәһең, йә ул - һине. Ысын дөрөҫөндә иһә блиндажға килеп ингән ул нимескә бер ыңғай ун һалдат атып ебәрер ине. Ундай мәлдә тиҙлек хәл итә, беҙҙең старшина әйтә торғайны "реакция" тип. Аҙаҡ, атҡас, уйлап та ҡуйырҙар ине, быны "тел" итергә лә булған... Әммә тәүге реакция: дошманды юҡ итергә! Вәт.

- Бүреһуҡҡан олатай, һин үҙең Мәскәүҙе һаҡлап ҡалғанһың немецтан, һөйлә әле шул турала?

- Ҡайҙан белдең уны, Нурия?

- Кәнсәләр йыйыштырғанда ишеттем, үҙең әйттең дә...

- Мәскәүҙең үҙендә үк булманыҡ, ә уны һаҡлауыбыҙ хаҡ. Калуга өлкәһенең Чернышено тигән ауылы эргәһендә һуғыштыҡ. Унан - туп-тура Мәскәүгә юл ята, дошманды үткәрһәң, баш ҡала ҡоланы, тигән һүҙ. Үткәрмәнек! Беҙҙең хәрби частың һалдаттары тотошлай тиерлек һәләк булды. Окопта, автомат тотҡан килеш, һуңғы минутынаса атышып, ҡан ҡатыш тупраҡҡа күмелеп ерләнде улар... Донъяның аҫты-өҫкә әйләнде унда: ике яҡлап та туптар атыла, пулялар һыҙғыра - мәшхәр, балаҡай. Мәскәү оборонаһы бит. Тәбиғәт үҙе лә ярҙам итте беҙгә, тыуған ер азатлығы өсөн һуғышыусыларға: декабрь һалҡындары әҙ немецты туңдырып үлтермәне... Ә беҙ ҡыштан ҡурҡмайбыҙ, сыныҡҡанбыҙ. Бер һалдатыбыҙ ҙа бер аҙым да артҡа сигенмәне. Артта - Мәскәү, унда, Генштабта - Сталин үҙе!

Олатайҙы ныҡ тулҡынланып тыңланым. Аҙаҡ автомат тотҡан көйө аяғүрә үлгән, окопта ҡанлы тупраҡҡа күмелгән совет һалаттары күҙ алдымдан китмәй йөҙәтте. "Мәскәүҙе һаҡлаусылар" тип инша яҙғас ҡына, күңелемдәге тетрәнеүҙәр дәфтәр битенә төшкәс кенә тынысландым. Төп геройым, әлбиттә, Әхмәҙин Көҫәпҡолов олатай ине.

И, олатай, и, гәп һуғырға әүәҫ ағайҙар, әлдә һеҙ бар был донъяла! Беләм дәһә, һеҙ булғанға беҙҙе, ҡатын-ҡыҙҙы, немец фашистары аяҡ аҫтына һалып тапай алманы. Еңелһәгеҙ бит, СССР-ҙағы йөҙәрләгән милләт, үҙ теленән, тарихынан, диненән ваз кистерелеп, "урыҫ" тигән дөйөм бер мөһөр менән ҡол ителер ине... Һеҙ - бар! Һеҙҙең гәптәрегеҙҙе тыңлап, ир-ат фәлсәфәһен үҙләштереүсе мин бар - атай һүҙҙәре, атай вәғәҙҙәре һалып ҡуйыла торған күңел тартмаларым буш түгел!

Иншама "5"-ле алдым...

*ЗАУЫҠ*

*Рауил ШАММАС*

# МИНЕҢ ӨСӨН ИГЕҘӘК ҺҮҘҘӘР -

## Яҡшылыҡ һәм яҡтылыҡ

### Ап-аҡ ҡарҙар яуа

Әл дә яумай әле ҡара ҡарҙар,
Әл дә яуа әле аҡ ҡарҙар.
Баш осомда гөрләй күгәрсендәр,
Әл дә түгел ҡара ҡарғалар.

Ҡара ҡарҙар һымаҡ ҡара бомба
Ил өҫтөнә яуған булды бит.
Ус төбөндә ине йөрәккәйҙәр -
Үҫмер сағым шулай уҙҙы бит.

Яу ҡырынан килде ҡара хәбәр -
Күҙ алдымда әле бөгөн дә -
Юғалтыуҙан, ауыр юғалтыуҙан
Ҡара күҙ йәштәре түгелде.

Бөгөн, ана, ап-аҡ ҡарҙар яуа,
Матурлыҡҡа биҙәп ер шарын.
Күтәрәһем килә һәйкәл итеп,
Тыныс саҡтың сихри аҡ ҡарын.

Ҡара ҡарҙар һымаҡ ҡайғыларҙы
Күрмәһендәр беҙҙең ейәндәр.
Ҡарағыҙсы, ап-аҡ ҡарҙар килгән,
Ап-аҡ шатлыҡ алып килгәндәр.

Илдең балалары, ейәндәребеҙ
Уйнаһындар, сумып аҡ ҡарға.
Көлөп, шатланышып уйнаһындар -
Шуны теләйем мин уларға.

Ҡара ҡарҙай ҡайғы яуған саҡты
Белмәһендәр улар ғүмергә.
Ҡара ҡарға кеүек бомбаларҙы
Яуҙырмайыҡ ғәзиз был ергә.

Әл дә яумай әле ҡара ҡарҙар,
Ап-аҡ ҡарҙар йәмләй еремде.
Йәмләндерһен, әйҙә, һөйөндөрһөн
Илкәйемде - берҙән-беремде.

Аҡ ҡар яуа, ап-аҡ ҡарҙар яуа...

### Еңеллектән еңел йығылыуың

Ат аҙғыны тайға эйәрә, тип
Бик тә белеп әйткән ололар.
Шул әйтемде һалып урталыҡҡа,
Уйланырға, дуҫтар, урын бар.

Йәнем көйә бөгөн, ҡай бер йәштәр
Еңеллекте һала елкәгә.
Эшләмәйсә, арҡаланып йәшәй
Тирен түккән ағай-еңгәгә.

Еңеллеккә барыу еңел бит ул,
Еңеллектең хәтәр һаҙлығы.
Хәмер бабай ҡармағына ҡаба,
Гүйә, аңра бағры балығы.

Икеләтә көйәм: тай-тулаҡҡа
Ҡамыт кейҙерәһе урынға,
Тормош һынауын үткән оло ағайҙар
Улар һуҡмағына борола.

Заманында комсомолда алған
Аҫыл ялҡын ҡайҙа юғала?
Әҙәми зат ниңә үҙен онотоп,
Хәмер һаҙлығына юл ала?

Еңеллектән еңел йығылыуың,
Эҙләмәйек әле еңелде.
Әҙәми зат, көтәм, һинән көтәм
Замандың был сирен еңеүҙе.

### Игеҙәк һүҙҙәр

Минең өсөн игеҙәк һүҙҙәр -
Яҡшылыҡ һәм яҡтылыҡ.
Шулай тиһәм, ҡараңғы көн
Китер һымаҡ яҡтырып.

Яҡшылыҡты атам-әсәм
Күңелемә һалғандыр.
Шул сифат тормош юлына
Етәкләп үк алғандыр.

Көнө-төнө яҡшылыҡтар
Өләшергә тырыштым.
Үҙемә лә емеш бирҙе
Был тәбиғи булмышым.

Күп яҡшылыҡтар күрҙем мин
Дуҫтарҙан, таныштарҙан.
Шул түгелме ялғыштарҙа
Дөрөҫ юлға баҫтырған.

Яҡтылыҡмы? Алла биргән
Иң ҡиммәтле бүләктер.
Ҡаяларҙы уҙған саҡта
Ышаныслы terәктер.

Яҡтылыҡтар бар сағында
Ҡәҙерен белгәнмендер.
Күңелдәрҙе сафлармын, тип
Шиғырҙар үргәнмендер.

Ошо оҡшаш игеҙәк һүҙҙәр
Иң ҡәҙерлеһе миңә.
Киләсәккә китеп барам,
Икәүһе - ике индә.

Уларҙы игеҙ, тимен мин,
Рифмаһы өсөн түгел.
Шул икәүҙең йылыһы менән
Йылына минең күңел.

Эй, игеҙәк һүҙкәйҙәрем,
Һис янымдан китмәгеҙ.
Һуңғы һулышҡа еткәнсе
Мине мәхрүм итмәгеҙ.

### Ғәжәп тылсым

Был тормошта кеше ҡылған
Хәтерҙәргә уйылып ҡала.
Гүйә, аҡҡа яҙылып бара
Аҡ һәм ҡара.
Донъя бит ул, һәммәһе бар,
Бар яҡшылыҡ, яманлыҡ.
Яманлыҡты ямай алыр
Юҡ ямаулыҡ.

Үҙәккә үткән булһа ла,
Яманлыҡ онотолһон.
Яҡшылыҡты өҫкә ҡуям,
Ул - йәнеңә көс-дәрт бирер
Ғәжәп тылсым.

Эс өҙөрҙәй дуҫ-иштәрем,
Иптәштәрем,
Донъя йөгөн бергә тартҡан
Ерҙәштәрем,
Киткәндәрем, тереләрем
Күңелемә һалды минең
Яҡшылыҡтың бөрөләрен.

Шул бөрөләр япраҡ яра,
Сәскә ата,
Ғүмеремде дауам итеп,
Алға тарта.

Ах, яҡшылыҡ - ғәжәп тылсым.
Яманлыҡтар онотолһон.

### "Миңә генә", тиҙәр...

Лотерея уйнай миллион кеше,
Тик бүләктәр бик аҙ, һанаулы.
Ҡатын-ҡыҙҙың нәфсе, матур йыртыҡ...
"Миңә генә", тиҙәр, сама - артыҡ.
Ирҙәр ғүмер буйы таба алмай
Шул йыртыҡты ямар ямауҙы.

Ирҙәр нәфсе башҡасараҡ инде,
Аҡыллыраҡтары алданмаҫ.
Ҡатын-ҡыҙҙар бүләк отмаһа ла,
Матур йыртыҡ барыбер ямалмаҫ.

Миллион араһында еңеп сығыу,
Бер ҡараһаң, инде көлкө лә.
"Миңә генә" тигән берәү шунда
Отоп ҡуйыуы бар, кем белә.

Ә шулай ҙа ошо "миңә генә"лә
Оптимистик рухлы бар хикмәт.
Өмөт итәләр бит аҫыл заттар,
Шуныһы бит, дуҫтар, бик ҡиммәт.

ИНТЕРНЕТТАН



# КЕҪӘ ТЕЛЕФОНЫ...

## аҡланды

■ Гел дөрөҫ туҡланмау һимереүгә генә түгел, хроник арыу һәм ялҡаулыҡҡа алып килә. Лос-Анджелестың Калифорния университеты ғалимдары ярты йыл буйына лабораторияла ҡомаҡтарҙа һынау үткәргән. Уларҙы ике төркөмгә бүлгәндәр, тәүге төркөм - шәкәрле, майлы, ҡыҙҙырылған ризыҡтар, икенсеһе сәләмәт аҙыҡ менән туҡланған. Тәүге төркөмдәге ҡомаҡтар эксперимент аҙағына һимергән. Ҡомаҡтарҙы билдәле бер шарттарҙа һалмауырға баҫырға өйрәткәндәр, шул саҡта ул ниндәйҙер бүләк - һыу йәки ризыҡҡа лайыҡ булған. Ярты йылдан һуң улар был бурыстарын насырараҡ үтәй башлаған. 30 минутлыҡ күнекмә ваҡытында улар йышыраҡ ял иткән. "Йәки фастфуд ялҡаулыҡ һәм арыуға килтерә, йәки уның һөҙөмтәһендә һимергәндән һуң улар ялҡауға әйләнә", - ти тикшеренеүҙәрҙең авторы Аарон Блейсдел.

■ Америка ғалимы Сиддхартха Мукерджи Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһына кеҫә телефондарын баш мейеһе яман шешенә килтереүсе факторҙар исемлегенән алып ташларға тәҡдим итә. Әгәр ҙә телефондар баш мейеһе яман шешенә алып килһә, һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә ауырыуҙар һаны күпкә артыр ине. 2011 йылдың июнендә Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мобиль телефондарҙы канцероген эффекты буйынса 2В төркөмөнә индергәйне. Был төркөмгә аҙаҡҡаса өйрәнелеп бөтмәгән физик факторҙар һәм химик матдәләр инә. Ғалим белдереүенсә, бөгөнгө көндә тәмәке тартыу һөҙөмтәһендә үпкә һәм ауыҙ ҡыуышлығы яман шеше һаны артҡан.

■ Ниндәйҙер күңелһеҙ хәлдә, бәләнe еңел кисереүселәр һаны күпкә аҙыраҡ. Күпселек бындай ваҡиғаларҙы оҙаҡ, ауыр һәм үҙенең төшөнкө торошо менән эргә-тирәһендәгеләрҙең тормошон тамуҡҡа әйләндереп кисерә. Психологтар раҫлауынса, яҡынының үлеме, айырылышыу кеүек хәлдәрҙән сығыу өсөн кеше бер нисә психологик торошто үтә. Бының өсөн 1-2 йыл үтергә тейеш. Бекман университеты (АҠШ) психологтарының яңы тикшеренеүҙәре уларға ярҙам итеү маҡсатынан башҡарылған. Төрлө исулдарҙы ҡулланып ҡарағандан һуң, ғалимдар шундай һығымтаға килгән. Үҙендә ыңғай тойғолар менән уратырға тырышыу күңел яраларын ваҡытлыса ғына дауалай. Шуға ла кеше бер аҙ ҡайғырып, үҙенең юғалтыуына өйрәнергә тейеш. Әммә был хәлдә оҙаҡ ҡалыу ҙа зыянлы, тап ошо ваҡытта улар тормоштоң ыңғай яҡтарын да ҡабул итеп өйрәнергә бурыслы. Тап шунда ғына пациенттарҙың эмоциональ хәле тиҙерәк яҡшыраса, ти психологтар.

■ Hitachi Ltd япон етештереүсеһе донъяла иң тиҙ лифт уйлап тапҡан. Ул сәғәтенә 72 км тиҙлегендә эшләй ала. Йәғни, 1-се ҡаттан 95-се ҡатҡа 43 секундта күтәрелергә була. Быға тиклем иң ҙур тиҙлекле лифт булып сәғәтенә 60,6 км тиҙлектә хәрәкәт итеүсе Тайвань лифты иҫәпләнә ине. Белгестәр әйтеүенсә, бындай тиҙлеккә ҡеүәтлерәк двигателдәр һәм еңелерәк тростар ҡулланып өлгәшелгән. Яңы конструкция килеһе йылда Ҡытайҙың Гуанчжоу ҡалаһында төҙөләсәк 111 ҡатлы йортҡа ҡуясаҡтар. Токио Оно компанияһы белдереүенсә, Hitachi үҙенең лифтын Ҡытай баҙарына тәҡдим итәсәк, сөнки был илдә лифттарға һорау ҙур.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# БЕР ТӨБӘКТӘН - ИКЕ ГЕРОЙ

## Батырлыҡҡа илткән тәүәккәллек



**Советтар Союзы Геройы Тимербулат Ғәләүетдин улы Халиҡов ағай минең ауылдашым. Ишембай районы (элекке Маҡар) районының Кинйәбулат ауылында 1917 йылда донъяға килгән данлы ауылдашымды күреп, хатта бер ни тиклем аралашыуҙан беләм.**

Бер аралашыу әле лә хәтерҙә ҡалған. Быны аңлатыу өсөн атайым Ҡотлоәхмәтов Фәйзрахман хаҡында ла әйтеп үтеү урынлы булыр, тип уйлайым. Ул һуғышҡа тиклем үк "Уран" колхозының (ул саҡта ул шулай атала) тәүге шоферы булған кеше. Һуғыштан ҡайтҡас, Ишембайҙа заводта ла эшләп алды. Әммә 50-се йылдар уртаһында уны, шофер- автомеханик, слесарь һәм токарь булған һөнәр кешеһен, оҙаҡ ҡына юллап, яһынан ауылға ҡайтарҙылар. Был саҡта колхоздың бер нисә машинаһы бар ине. Атайым шуларға гараж төҙөргә уйланы ла, колхоз ярҙам ҡулы һуҙмағас, үҙебеҙ ғаилә менән эшләргә булдыҡ. Беҙ Нәфиҡ ағайым менән көндәр буйы шул эш менән мәшғүлбеҙ. Бер көндө яныбыҙға Тимербулат ағай килде. Ҡабығы әрселгән бүрәнәгә урынлашҡас, атайым:

- Энем, йәштәр, бигерәк тә ошо минең малайҙар, һинең һуғышта күрһәткән батырлығың хаҡында ишеткеһе килә, һөйләп, иҫкә төшөрәһеңме әллә? - тип һорай ҡуйҙы.

- Эй, Фәйзрахман ағай, уларҙы нисек һөйләп бөтөрәһең, иң мөһиме, беҙ дошманды енеп ҡайттыҡ, - тип ҡулын һелтәп кенә ҡуйҙы ағай. - Малайҙар үҫә, ҡәләмдәре лә шымара төшһөн. Бәлки, һөйләшеп, серләшеп тә ултырырбыҙ...

Үкенескә ҡаршы, Тимербулат ағай менән әңгәмәләшергә насип булманы. Ул 1948 йылдың ноябрь айында ни бары 41 йәшендә яҡты донъяларҙан китеп барҙы. Ауылдашым батырлығы хаҡында материалдарҙы туплауҙы ҙ өҫтөмә алғайным ул саҡта. Улар миндә хәҙер байтаҡ йыйылды. Иң мөһимдәренә генә туҡталайыҡ.

Тимербулат ағай Бөйөк Ватан һуғышы башланырға ике йыл ҡалған арала алыҫ Көнсығышта хеҙмәт итә. Һуғыш башланыу менән Башҡортостанда ойошторолған Башҡорт кавалерияһына ҙ теләге менән яҙылып, 1941 йылдың декабрь айында яуға китә. Ул хеҙмәт иткән генерал-лейтенант Г.А.Белов етәкселегендәге 61-се армия ғәскәре, төрлө хәтәр бәрелеш-ҡыйралыштарҙа ҡатнашып, ниһайәт, 1943 йылдың сентябрендә Черниговтан төньяҡтараҡ ятҡан Десна йылғаһына яҡынлаша. Был саҡта Тимербулат ағай хеҙмәт иткән 16-сы Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһы, корпустың 1-се эшелонында булып, Зметнево-Сосница-Баба һәм Березна ҡасабаһына һөжүм итә. Төп маҡсат: дошманға тын алырға ла ирек бирмәй, һәр яҡтан ҡыҫырыҡлау, көтмәгәндә флангыларына һәм тылына сығыу, дошмандар сафында паника тыуҙырыу...

18 сентябрҙә Т. Халиҡовҡа Мена станцияһын алырға бойороҡ бирелә. Быға ҡәҙәр улар 50 километрҙан артыҡ юл үткән була. Ләкин туҡталырға ярамай. Кинәт алда тәгәрмәс, ат тояҡтары тауышы ишетелә. Оҙаҡламай һалдаттар оло йөк колоннаһын күрәләр һәм уға ташланалар. Бер взвод фашистар юлда ятып ҡала, күптәре әсирлеккә алына.

Ауылдашым хеҙмәт иткән взвод район үҙәге Березнаға яҡынлаша. Был ҡасабанан төп юл Чернигов һәм башҡа ҡалаларға алып бара. Стратегик яҡтан әһәмиәте иҫ киткес ҙур. Березнала дошмандың ике батальоны урынлашҡан була. Бында минең ауылдашым, взвод командиры тиңһеҙ ҡаһарманлыҡ күрһәтә. Бына нимә тиелә был хаҡта Тимербулат ағайға бирелгән наградаың яҙмаһында: "1943 йылдың 18 сентябрендә Березнаға һөжүм иткәндә иптәш Халиҡов икенсе взводтан беренсе булып ауылға барып инә һәм дошмандың көслө миномет утына эләгә. Иптәш Халиҡов тиҙ генә немецтарҙың батарея флангыһына күсеп, пулеметтың урынлаштыра ла, сигенеүсе дошманға ут аса. Нәтижәлә, взвод 87 һалдатты һәм офицерҙы ҡырып, 78 гитлерсыны әсирлеккә алып, дошман гарнизонын юҡ итеүҙә тәьмин итә".

Ауылдашымдың һәм башҡа ҡаһарман егеттәрҙең тиңһеҙ батырлығы һөҙөмтәһендә иң әһәмиәтле Березна дошмандан таҙартыла. Был пункт өсөн барған һуғыштан 400-ҙән ашыу фашист әсирлеккә алына. Әллә күпме трофей һуғыш ҡоралдары ҡулға төшөрөлә.

Әлеге ҡаһарманлығынан һуң ун көн үтеүгә, 28 сентябрҙә, Тимербулат ағай тағы ла бер батырлыҡҡа илткән тәүәккәллек ҡыла. Төнөн эскадрондан беренсе булып үҙенең пулемет расчеты менән Днепрҙы кисеп сыға ла фашист автоматсылары өҫтөнә төрлө яҡтан үлем яуҙыра башлай. Көтөлмәгән бындай һөжүмдән немецтарҙың тере ҡалғандары, ҡоралдарын ташлап, ҡаса башлай. Яр буйы, ҡыуаҡтар араһы фашист мәйеттәре менән тула. Ошо һөжүм арҡаһында полктың башҡа подразделениелары йылғаны иҫәнимен кисеп сығып, яуға, алға ташлана.

Был ҡаһарманлыҡты күрмәү, баһаламау мөмкин түгел, әлбиттә. Оҙаҡламай, Чернигов полкының 60-сы гвардия командиры майор И.Ф. Горлатов гвардия сержанты Тимербулат Ғәләүетдин улы Халиҡовҡа Советтар Союзы Геройы исеме биреүҙе юллап рапорт яҙа. Уға Г.А. Белов та ҡул ҡуя. Юғары Хәрби совет аҙағында ла ауылдашымдың ҡаһарманлығын иң юғары награда менән баһалай. 1944 йылдың 15 ғинуарында уға Советтар Союзы Геройы тигән юғары исем бирелә.

Геройыбыҙ ауылыбыҙға ҡайтҡас, түгеләрҙән булып СССР-ҙың юғары Советына депутат итеп һайланды. Күп ауылдарҙы берләштергән тыуған ерендә колхоз-совхоздарға етәкселек итте, әммә һәр саҡ ябай, баҫалҡы, киң күңелле булып ҡалды. Ауылдаштарыбыҙ, бигерәк тә йәш быуын, уның исеме менән ғорурланып йәшәне, йәшәй. Кинйәбулат ауылының урта мәктәбе уның исемен йөрөтә. Мәктәп алдындағы Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына арналған стелала Советтар Союзы Геройҙары Тимербулат Халиҡов, Ғәли Бирҙиндың һәм өс Өсөнсө дәрәжә Дан орденына лайыҡ Камал Шәрәфетдиновтың исеме һәм фотоһы айырым урын алып тора. Тыуған ерендәге хәтер - иң оло баһа!

## Һуғыш һәм тыл комиссары



**Икенсе яҡташым, улай ғына ла түгел, бер ауыл Советына ҡараған күрше Байгужа ауылында тыуып үҫкән Советтар Союзы Геройы Ғәли ағай Бирҙин менән минә йышыраҡ күрешеү, аралашыу бәхете тейҙе. Башланғыс мәктәпте тамамлағас, беҙ уның ауылына йөрөп уҡыныҡ, ете класс белемде шунда алдыҡ. Һуғыштан һуң ул ғүмеренең һуңғы көнөнәсә ҙур һәм бәләкәй ауылдарҙы берләштергән ошо ауыл Советына етәкселек итте. Бер нисә тапҡыр РСФСР Юғары советы депутаты итеп һайланды. Уға ҡайһыбыҙ ғына ниндәй генә йомош менән килмәй торғайныҡ! Ул эшләгән осорҙо уйлаһам, "Егет булһа, ебеп тормаҫ, ебеп торһа, егет булмаҫ" тигән бер халыҡ мәҡәле иҫкә килеп төшә. Әйтерһең, Ғәли ағай характерына ҡарап сығарылған. Кем генә килмәһен, аптырап ҡалмаҫ, тыңлар ҙа уның ихтыяжын үтәргә тырышыр, күңел күтәрер һүҙҙәрен дә табыр, шаяртып та алыр...**

Характер, холоҡ, тәбиғәт... Был үҙенсәлекле сифаттар, моғайын, кешегә тыуғандан уҡ һалыналыр. Тормош шуны раҫлай. Уларҙа, ғәҙәттә, ихтыяр көсө ҙур була. Ғәли ағай Бирҙиндең биографияһына ғына күҙ һалайыҡ. 1907 йылда тыуған үҫмер, 1924 йылда уҡ комсомол сафына баҫып, комсомолдың волость комитеты секретары булып эшләй башлай, унан партия комитетына күсә. Әлбиттә, был осор, бигерәк тә ауылдарҙа синфи бәрелештәрҙең ҡыҙған сағы, кешеләрҙең тиҙ өлгөргән мәле. Артабан уны машина-трактор станцияһына етәксе итеп ҡу-

йыуҙары ла ошо тәүәккәл характерының дауамы, бер сакта ла ебеп ҡалмаҫ егеткә ышаныс билдәһе булғандыр.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас та Ғәли ағай үҙ булмышына, тәбиғәтенә тоғро булып ҡала. Уны 261-се уҡсылар дивизияһының сапёрҙар полкына политрук итеп ҡуялар. Беренсе алыш Ржев ҡалаһы янында була. Был алышта пуля унаң аяҡ сирағын сәрпәкләп үтә. Политрукка туғыҙ ай дауаланырға тура килә. Аяғы шәбәйеп етмәһә лә, ул алғы һыҙыҡҡа - фронтҡа ынтыла. Ваҡыт, алыш ниндәй бит: һәр һалдат, һәр командир иҫәптә. Бигерәк тә нәҡ уның кеүек яугирҙарҙы рухландырыусы агитатор-командирҙар кәрәк. Оҙаҡламай һуғыш юлдары уны Сталинградҡа килтереп еткерә. Ябыҡҡан, бит һөйәктәре беленеп торған Ғәли ағай Бирҙинды Чуйков командаһындағы 62-се армияның танкка ҡаршы рота политругы итеп тәғәйенләйҙәр. Бына ошонда, Сталинградтағы алыштың трактор заводына ҡаршы урынлашкан Спартаковка тигән ҡасабаһында, башынан аҙағынаса уға йәшәү менән үлем сигендә - ут араһында булырға тура килә. Унан Курск дуғаһы... Кешелек донъяһында үткән иң аяуһыҙ ҡанлы бәрелеш. Әҙәм рухының көсөн, бейеклеген һәм бөйөклөгөн раҫлаған алыш... Ғәли ағайға был алышта ла ҡатнашып, иҫән ҡалыу насип була. Бигерәк тә Мелихово тигән ауыл янында булған яу хәтеренән сығырлыҡ түгел. Бер саҡ кемдер "Танктар!" тип ҡысҡырып ебәрә. Башҡаһын хәтерләмәй... Ғәли ағайҙы тупраҡ күмеп киткән, кемдәрҙер ҡотҡарған.

Яҡташымдың һуғыш юлының икенсе этабы Днепр йылғаһын аша сығыу менән бәйле. Курск алышынан һуң хәрби частарҙы үҙгәртеп ҡоралар. Улар яңы йәш һалдаттар менән тулыландырыла. Капитан Бирҙин эләккән батальонда бөтәһе лә тип әйтерлек комсомол сафындағылар булып сыға. Днепр яры өсөн барған алышта батальон командиры Старунский һәләк була. Бөтә яуаплылыҡ комиссар Ғәли Иркәбай улы Бирҙин елкәһенә ята. Ул 1943 йылдың 22 сентябрендә ҙур бер мәмерйәлә асыҡ йыйылыш үткәрә. Днепр йылғаһын нисек сығыу, кәмәләр эшләргә кәрәклеген аңлата ла:

- Утыҙар кеше өс кәмәлә сығабыҙ. Беренсеһендә - мин, икенсеһендә - парторг Рафанов, өсөнсөһөндә - Скапков. Артҡа сигенеү юҡ! Партия беҙгә ғүмерҙе лә, йәшәр өсөн торлаҡты ла тик теге ярҙа ғына бирә!

Ярты сәғәттән уны полк командиры Батурин саҡыра:

- Минең бойороҡ: һеҙ өсөнсө кәмәлә бараһығыҙ!- ти.

- Так точно! - тигәс, улар ҡосаҡлаша.

- Салауат батырлығын иҫеңә төшөр, уға лайыҡ бул. Беҙ бит һеҙҙең геройҙы яҡшы беләбеҙ...

Ғәли ағай, күтәренке кәйеф менән атлап китһә лә, төнгө ҡурҡыныс сәйәхәт хаҡында бер туҡтауһыҙ уйлана. Мотлаҡ теге ярға сығасаҡтарына ышана. Ысынлап та, төнөн Днепрҙың уртаһына еткәнсе кәмәләрҙе дошман күрмәй, тик күктә ракеталар яҡтырып, һыуға сума. Әммә йылғаның иң ағым урыны - уртаһына еткәс, пулеметтар "телгә" килә, эргәләрендә генә снарядтар туҡтауһыҙ ярыла, кәмәләрен төрлө яҡҡа сайҡай, ҡаға-болғай башлай. Ракеталарҙан түгелгән ҡот осҡос яҡтылыҡ күккә яра. Кәмәләргә снарядтар тейеүҙән бигерәк тә тәүге кәмәләрҙә яраланыусылар күбәйә бара... Бирҙин ағайҙың кәмәһенә имен-аман ярға сығыу бәхете тейә. Ул ярға сыҡҡандарҙы ҡарай-тикшерә башлай. Кемдер:

- Иптәш, майор! - ти. Ул сержант Иванов булып сыға.- Беҙҙең яраланғандар бар!

- Бына нимә, Иванов. Һинә яралыларҙы ҡарау, яраларын бәйләүҙе ойоштороу йөкмәтелә. Уларҙы алып, теге ярға сығыгыҙ!

- Немецтарҙың иманын уҡытырға ине...

- Бойороҡто үтәгеҙ! Тик яралыларҙы теге ярға сығарғас, майор Жеребцов менән янынан был ярға сығығыҙ!

- Тыңлайым, иптәш командир!- ти Иванов, шатлығын йәшермәй.

Төн ҡараңғылығы, прожектор яҡтыртылмағас, ҡуйыра төшә. Бына бер саҡ беҙҙекеләрҙең "Ура!" тауышы ишетелеп ҡуя. Шул саҡ Бирҙин ағай ракетаһын юғары сөйөп атып ебәрә лә:

- Һалдаттар, Тыуған ил өсөн, ура!- тип ҡысҡырып, немец траншеялары яғына атыла. Әллә нисә тауыш "Урра!" ҡабатлап, уның артынан атакаға ташлана. Дошман траншеяһына яҡынлауын тойоп, майор бер-бер артлы гранаталарын сөйә башлай... Дошман пулеметтары бер юлы тетелдәй башлай. Шул саҡ алыҫта беҙҙең катюшалар ҙа "телгә килә". Тик баш ҡалҡытыу ҡурҡыныс - алда дошман снайперы беҙҙең һалдаттарҙы берәм-берәм сүпләй.

- Рафанов!- ти майор Бирҙин,- дошман снайперын тап, иғтибарын икенсе яҡҡа йүнәлт, беҙ Чугаев менән уң яҡтан үтәбеҙ.

-Ярай, - ти ҙә батальон парторгы, - бәлки, быны һеҙгә эшләргә кәрәкмәҫ? - тип өҫтәй.

- "Бәлки" килеп сыҡһа, һин минең урынға ҡалаһың.

Бирҙин ағайҙың адъютанты уны шунда уҡ аңлай. Уның янына ҡасабоҫа килеп еткәс, икәүләп ҡыуаҡлыҡтар араһына шыуышалар. Бер саҡ егеттәр тәтән ебен күреп ҡалалар. Чугаев ике аҙым ырғыуҙа снайпер янына етеп, автоматын эшкә егеп, уны ояһынан бәреп төшөрә. Биш минут үтеүгә, бөтә батальон аяҡ өҫтөнә баҫып, яуға күтәрелә. Оҙаҡламай Бирҙин менән Звездин етәкселек иткән ике батальон бергә ҡушыла. Улар азат иткән Каховка ауылы кешеләре сикһеҙ шатлыҡ менән, флагтар сөйөп, күҙ йәштәрен һөртә-һөртә совет һалдаттарын ҡолас йәйеп ҡаршылай. Иң алға төрлө тауарҙарҙан тегелгән, иңе 2-3 метр оҙонлоғондағы туҡымаға "Слава героям Бердину, Звездину, рядовому Ермолаеву!" тип яҙылған полотно ҡаҙалған була. Шул саҡ майор Жеребцов Ғәли ағай Бирҙин эргәһенә килеп баҫа ла уның ҡулдарын ҡыҫып:

- Ҡотлайым, һеҙгә Советтар Союзы Геройы исеме бирелде!- тип йылмая. "Урра!" тигән тауыштар ишетелеүҙән Ғәли ағайҙың тамағына төйөр тығылғандай була... Ғәли Иркәбай улына тапшырылған бүләк ҡағыҙындағы "ҡаһарманлыҡ күрһәтте, ул үҙе бер танкты, һигеҙ дошман һалдатын юҡ итте, батырлығы, һүҙе менән һалдаттарының хәрби рухын күтәрҙе" тип яҙылған һүҙҙәр был ваҡиғаларҙа ул уйнаған ролдең әһәмиәтен раҫлай. 1945 йылда бер көндө М.И. Калининдан: "Чкалов ҡалаһына Ленин ордены һәм Советтар Союзы Геройының Алтын йондоҙон алырға юлға сығығыҙ"- тигән телеграмма килә. Награданы уға Көньяҡ Урал округы командующийы генерал Захаров тапшыра. Уның бүлмәһенә ингәс, Геройға хөрмәт йөҙөнән генерал-офицерҙар составы аяҡ өҫтә баҫып, ҡул сабып ҡаршылай...

Бына шундай характерлы, егет булараҡ та тиҙ өлгөргән, ҡыйынлыҡтарҙан ҡурҡмаған тәүәккәл, ихтыяжы ҙур, көслө рухлы ине мин яҡшы белгән тағы ла бер яҡташым.

**Риф МИФТАХОВ.**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ҺАБАҠ БИРЕР ХӘЛДӘР

* * *

Бер көн Мансур тигән кешене себен тешләй. Бик асыуланып, ул күренекле дин ғалимы Йәғәфәр әс-Садиҡҡа мөрәжәғәт итә:

- Эй, Абдулла улы! Ни өсөн Алла себенде булдырған?

Имам Йәғәфәр былай тип яуап бирә:

- Мин-минлектәре артыҡ ҙурайып киткәндәргә үҙ урынын күрһәтер өсөн!

* * *

Зәйнулла тигән дин ғалимы намаҙ уҡырға әҙерләнеп, тәһәрәтләнгән мәлдә ағарынып китә. Унан "Ни булды?" тип һораһалар, аҡыл эйәһе шулай тип яуап бирә: "Әгәр ҙә һеҙ хәҙер минең Кем алдына барып баҫасағымды бөтә тәрәнлегендә күҙ алдына килтерһәгеҙ, минең менән нимә булыуын аңлар инегеҙ!"

* * *

Әбү-Хөрәйрәнән (раҙыяллаһу ғәнһү) һорағандар:

- Иртәгә үлерегеҙҙе белһәгеҙ, нимә эшләр инегеҙ?

- Мин белем алыуымды дауам итер инем, - тигән ул артыҡ күп уйлап тормайынса.

* * *

Бер фәйләсуфтән һорағандар:

- Был донъяла нимәгә эйә булыу иң еңеле?

- Хыялға. Сөнки ул һәммәбеҙҙә лә бар.

* * *

Бер фәйләсуфтән һорағандар:

- Был донъяла иң ҡатмарлыһы нимә?

Ул былай тип яуап биргән: "Һүҙ. Сөнки уны ҡайһы саҡ аңлауы бик ауыр һәм шулай уҡ аңлатыуы ла..."

* * *

"Мин үлемдән ҡурҡам, шуға ла уны яратмайым", - тигән кешегә Хәсән Басрый былай тип әйткән: "Һин уны үҙеңдән һуң байлығыңды ҡалдырырға теләеш булғаның өсөн яратмайһың. Әгәр байлығың һинән алда барһа, һин уның артынан сабыр инең".

* * *

Бер көн Сәғәҙей Шираҙиҙан һорайҙар:

- Нимә ул кеше?

Уның яуабы:

- Бер тамсы ҡан һәм мең төрлө икеләнеүҙәр.

* * *

Бер ғалимдан кемдән белем алыуы тураһында һорағандар икән, ул:

- Һуҡырҙарҙан, сөнки алда ни булғанын тикшермәй тороп, улар бер аҙым да атламай, - тип яуап биргән.

* * *

Абу Дарда (раҙыяллаһу ғәнһү) ярлылыҡҡа зарланған ҡатынына: "Түҙ, беҙҙең алда шундай бейеклек буласаҡ, ә унда йөгө ауыр булмағандар ғына менә ала", - тигән.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Зирәклек: сисә алмаҫлыҡ мәсьәләләрҙе хәл итеү

*Аҡыллы лидерҙар ишеткәндәренең яртыһына ғына ышана. Зирәк лидерҙар ҡайһы яртыға ышанырға икәнлеген белә.*
*Джон Максвелл.*

Зирәклек ниндәйҙер әһәмиәтле проблеманың тамырын табыу һәләте менән ҡылыҡһырлана һәм ул интуицияға, төплө фекерләүгә нигеҙләнә. Әлбиттә, йөгонтоло лидерҙар зирәклеккә мохтаж, әммә уны һәр ерҙә һәм һәр хәл-торошта ҡулланмай. Зирәклек - үҙенең йөгонтолологон арттырырға теләгән һәр лидер өсөн мотлаҡ булған һәм алмаштырғыһыҙ сифат. Уның ярҙамында бер нисә мөһим маҡсатҡа өлгәшергә мөмкин:

**Барлыҡҡа килгән проблемаларҙың тамырын табыу.** Ҙур ойошмаларҙың лидерҙары һәр көн ғәйәт ҙур буталсыҡлыҡ һәм ҡатмарлы проблемаларҙы уңышлы хәл итергә тейеш. Уларға бер ваҡытта ла ниндәйҙер хәл-ваҡиғаның тулы картинаһын күҙаллау өсөн етерлек мәғлүмәт туплау мөмкин түгел. Һөҙөмтәлә уларға бары тик үҙҙәренең зирәклегенә, алдан күрә белеүсәнлегенә генә ышанырға ҡала. Макгилла университетының билдәле тикшеренеүсеһе Генри Минцберг был фекерҙе түбәндәгесә әйтеп бирә: "Теләһә ҡайһы предприятиеның ойоштороу һөҙөмтәлелеге рационаллек тип аталған тар һәм алыҫҡа төбәлмәгән идеяла ғына тынысланып ятмай. Ул айыҡ аҡыллы логикаға һәм тойомлауға мохтаж". Зирәклек лидерға картинаны өлөшләтә күреү мөмкинлеген бирә. Тойомлау уны булмаған элементтар менән тулыландыра һәм килеп тыуған проблеманың сығанағын табырға ярҙам итә.

**Проблемаларҙы хәл итеү һәләтен камиллаштырыу.** Әгәр алдығыҙҙа торған проблеманың нигеҙен күрергә һәләтле булһағыҙ, тимәк, уны хәл итә алаһығыҙ. Лидер үҙенең компетентлыҡ өлкәһенә ни тиклем яҡыныраҡ тора, һәләтле, уның тойомлауы шул тиклем нығыраҡ һәм ул проблема сәбәптәрен шул тиклем яҡшыраҡ күрә. Шуға ла зирәклегегеҙ ҡеүәтен тулыһынса ҡулланырға теләһәгеҙ, ниндәй өлкәлә көслөһөгөҙ, шуны эшләгеҙ.

**Булған варианттарҙың иң һөҙөмтәлеһен табығыҙ.** Менеджмент мәсьәләләре буйынса консультант Роберт Хеллер шундай кәңәш бирә: "Бер ваҡытта ла күңелегеҙ менән тойған нәмәләргә күҙ йоммағыҙ һәм иғтибарһыҙ ҡалдырмағыҙ, әммә бер ваҡытта ла был тойғо етерлек тип уйламағыҙ". Зирәклек бары тик тойомлауға, шулай уҡ аҡылға ғына ҡоролмай. Зирәклек һеҙгә хис-тойғоларығыҙҙы, аҡылығыҙҙы файҙаланып, ойошмағыҙҙың һәм хеҙмәткәрҙәрегеҙҙең эшмәкәрлеге өсөн иң яҡшы вариантты табырға ярҙам итә.

**Мөмкинлектәрегеҙҙе арттырығыҙ.** Зирәклек етешмәгән кешеләр "кәрәкле" урында һәм "кәрәкле" ваҡытта бик һирәк була. Бөйөк лидерҙар ҡайһы берәүҙәргә уңышлы, бәхетле кешеләр булып күренһәләр ҙә, улар үҙ бәхетте үҙҙәре ҡойоуына иманым камил. Был иһә уларҙың тәжрибәнен файҙаланыу һәм инстинкттарына эйәрергә әҙер булыуҙы аңлатҡан зирәклеге һөҙөмтәһе булып тора.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 12 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "В наше время" (16+).
16.10 "Они и мы" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Второе дыхание". Мелодраматический сериал. 1-2-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 Ночные новости.
0010 "Познер" (16+).
00.15, 03.05 "Темная вода" (16+).
03.00 Новости.
03.15 "В наше время" (12+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Иду на таран". Док. фильм (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит".Сериал
17.00 "Вести".
17.45 "Вести-Башкортостан".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сестра моя, любовь". 1-4-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.45 "Девчата" (16+).
01.30 "Фальшивая личина". Остросюжетный фильм (16+).
